Үҙ-үҙегеҙҙе маҡтамағыҙ. Үҙегеҙгә кәрәкмәгән һүҙгә ҡатышмағыҙ. Сит кешеләрҙең серҙәрен тикшереп йөрөмәгеҙ. Ике кеше һөйләшкәндә араларына барып инмәгеҙ. Үҙегеҙгә аманат ителмәгән серҙәрҙе шәриғәт рөхсәтенән башҡа ерҙә һис фаш итмәгеҙ.

**РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

11 - 17 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2009 ЙЫЛ

№28 (342)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һеҙҙең менән бәхетлебеҙ,** дуҫлыкты дауам итеүселәр



2

**Инглиз телен өйрәнеү ҙә...** заман ҡуйған талап



4

**Заманса башҡорт архитектураһы бар,** ул йәшәргә, камиллашырға хаҡлы



8-9

**Сирҙәренде ағасҡа һөйлә...** улар анлай, хәленә инә



12

**ТВ программа**

14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең машинаны туҡтатып, бәйләнергә сәбәп эҙләгән юл хәүефһеҙлеге инспекторының был ҡылығын нисек баһалайһығыҙ?

*Әлиә НАСЫРОВА, страховка агентлығының баш белгесе, стажы 4 йыл:*

-Юл хәүефһеҙлеге инспекторҙарына ҡарата яҡшы ҡарашта булған водителдәрҙе күргәнем юҡ. Мин ундай хеҙмәт кәрәкмәй, тип тә әйтмәйем. Ни өсөн тигәндә, руль артында иҫеректәр ҙә, наркомандар ҙа, тиҙлек яратыусы шумахерҙар ҙа йөрөй. Ә беҙҙә нисек килеп сыға: инспекторҙар шулар менән көрәшеү урынына, ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ үтәгән водителдәрҙе туҡтатып, бәйләнергә сәбәп, һылтау эҙләй башлай. Яңыраҡ апайым менән юлда машинала килә инек. Баланы артҡа, креслоға ултыртҡанбыҙ. Беҙҙе туҡтатҡан инспектор: "Был кресло һеҙҙекеме?"- тип бәйләнергә тотондо. Мин уға: "Бындай талап ниндәй ҡағиҙәлә яҙылған?" - тип әйткәйнем, ауыҙына һыу уртланы.

*Артур ЙЫҺАНШИН, программист, стажы 8 йыл:*

-Юл хәүефһеҙлеге инспекторҙарын яуапҡа тарттырыр өсөн генә лә ФСБ-ға эшкә барырға теләйем. Улар автомобиль хужаларының закондары белмәүен, рәсми тонда һөйләшә алмауын файҙаланып, нимә теләйҙәр, шуны эшләйҙәр. Водитель таныҡлығы алған саҡта уларға ихтирам менән ҡарай торғайным. Ҡағиҙәләрҙе лә боҙмаҫҡа тырыштым. Әммә ике тапҡыр оятһыҙ рәүештә бер ниндәй ҙә ҡағиҙә боҙмаған минән аҡса талап иткәндән һуң уларға мөнәсәбәтем ҡырҡа үҙгәрҙе.

Юл хәүефһеҙлеге инспекторы булып намыҫлы, ғәҙел кешеләр генә эшләргә тейеш, тип кенә әйтеү етмәй бында. Һөҙөмтәле закондар кәрәк. Әйтәйек, инспектор машинаны туҡтата, бәйләнергә сәбәп, һылтау эҙләй, унан нисек булһа ла, тиҙерәк ҡотолорға теләгән водитель аҡса тәҡдим итә. Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, был осраҡта водитель инспекторҙы урынына ултырта ала. Тимәк, тик кеҫәһен генә ҡайғыртҡан инспекторҙарҙың үрсеүендә беҙ ҙә ғәйепле бит, йәмәғәт...

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ҮҘӘГЕ - ЕРЕКТӘ...

## Йәғни ошо үҙәкте барып күреүебеҙ тураһында

**Үткән аҙнала Ғафури районы Ерек ауылында "Ерек - Башҡортостан үҙәге" исеме аҫтында Шәжәрә байрамы уҙҙы. Нәҫел-нәсеп, ара-ырыу тарихы менән танышып ҡына ҡалманы еректәр был көндө, ата-бабаларын хәтергә алып, уларҙың данлы эш-ғәмәлдәренә баһа бирҙе, үҙҙәрен уларҙың лайыҡлы вариҫтары итеп тә күрһәтте. Байрамда ҡатнашыусылар был ауыл халҡының тырыш, йырлы-моңло халыҡ икәненә тағы бер ҡат шаһит булды. Улай ғына түгел, "Ҡара әле, ауылы менән әртистәр икән дә былар, бала-сағаһынан башлап, ололарына тиклем йырлап-бейеп кенә ҡалмайынса, йола күрһәтеү тамашаларында роль башҡарып, хайран итте", - тип тә һоҡландылар.**

(Дауамы 5-се биттә).



НИҺӘЙӘТ!

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ - ИНТЕРНЕТТА

Башҡорт теле Рәсәйҙә рус теленән һуң үҙенең машина (компьютер) фонды булған икенсе тел иҫәпләнә.

Башҡорт теленең машина фондын булдырыу өсөн 2005 йылдан алып Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында һәм Башҡорт дәүләт университетының Интернет үҙәгендә эш алып барылды. Башҡорт теленең машина фонды тел өлкәһендә тикшеренеүҙәрҙе автоматлаштырыу һәм мәғлүмәт менән тәьмин итеүсе система. Фонд лингвистарға ғына түгел, башҡа кешеләргә лә файҙалы буласаҡ. Мәҫәлән, машина фондының лексикографик базаһы башҡорт теленең 33 һүҙлегенән тора, Интернет менән һәр ҡулланыусы уның менән "он-лай" режимында эшләй ала. Базаға дөйөм филологик, махсус һүҙлектәр һәм белешмәләр индерелгән.

Шулай уҡ бында башҡорт теленең генераль картотекаһы урынлаштырылған. Ул Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты бүлегенең картотекаһы нигеҙендә төҙөлгән. Генераль картотека ике миллион берәмектән тора. Бынан тыш, машина фондында грамматик һәм эксперименталь-фонетик база бар, улар башҡорт теленең грамматикаһын һәм фонетикаһын өйрәнергә мөмкинлек бирә.

Машина фондының төп өлөшөн шулай уҡ диалектологик база, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында һаҡланған боронғо китаптар һәм ҡулъяҙмалар алып тора. Башҡорт теленең машина фондының Интернеттағы сайты: **http://mflb.ru/**.

*✓ Аңлы кеше ошо баҫманың тап уның өсөн, башҡорт кешеһе өсөн ижад ителеүен аңлар, ул хатта оҡшамаһа ла, баҫманың артабан йәшәүе, тиражы үҫеүенә булышлыҡ итер.*



МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# ҺЕҘҘЕҢ МЕНӘН БӘХЕТЛЕБЕҘ,

## дуҫлыҡты дауам итеүселәр

**Быйылғы йылдың икенсе ярты йыллығына гәзит-журналдарға яҙылыу тамамланды. Уның һөҙөмтәләре әллә ни ҡыуандырманы ҡыуандырыуға. Башҡа баҫмалар кеүек үк, беҙ ҙә бер аҙ юғалтыуҙар кисерҙек. Күңелдә гәзит-журналдарға яҙыла алып та, йә онотоп, йә почта бүлексәһенә инеп сығырға ваҡыт тапмаған, йә үҙ туған телендәге баҫмаларға битараф ҡалған милләттәшебеҙгә... Бер аҙ үпкә тойғоһо бар, тиһәм, үпкәләүҙең насар күренеш икәнен үҙебеҙ туҡтауһыҙ яҙабыҙ. Нисек кенә булмаһын, туған телдәге матбуғат баҫмаһына яҙылыу - ул милләтебеҙҙең абруйын күтәреү, һанлау һәм һаҡлау икәнен онотоп ебәргәндәр барыбер ҙә әрнетә шул инде...**




Бик теләп тә, баҫмаларға яҙылыу мөмкинлегенә эйә түгелдәр, тере аҡса төҫө күрә алмағандар ҙа бар. Улар башлыса ауылдарҙа йәшәй. Уларға үпкә юҡ. Тап шундайҙарға ярҙам йөҙөнән "Киске Өфө" - бүләгем" тигән акция иғлан иткәйнек. Шул акцияға ҡушылған изге күңелле, йомарт дуҫтарыбыҙға тағы бер тапҡыр рәхмәт әйтәбеҙ. Улар ярҙамы менән йөҙләп уҡыусыбыҙ икенсе ярты йыллыҡта ла баҫмабыҙҙы алдырып ҡыуанасаҡ.

Бер тапҡыр яҙылып ҡарап та, дуҫлыҡты дауам итергә теләмәгәндәргә... юҡ, шулай уҡ үпкә юҡ. Сәбәптәре төрлөсә булыуы мөмкин бының. Мәҫәлән, кемдер берәү үҙе яҙған шиғырҙарҙы баҫмағаныбыҙға бик тә үпкәләгән (ә беҙ гәзит уҡыусыларҙан килгән мәҡәлә, йә әҙәби әҫәрҙәрҙең баҫыла алырҙайҙарын шунда уҡ гәзит биттәренә сығара һалабыҙ), кемдер берәүҙе тыуған көнө менән ҡотламайынса рәнйеткәнбеҙ (йәл, ошондай яңылышлыҡ беҙҙең ғәйеп менән булған, күрәһең). Бындай хәлдәр йыш булмай, гәзитебеҙ сығып килгән ошо ете йыл эсендә - ике осраҡ. Барыбер ҙә үпкәләүҙе алға сығарып, дуҫлыҡтан баш тартып яҙған хат алыу ҡыйын булды.

Һәм тағы... Гәзит уҡыусыларыбыҙ менән осрашыуҙарҙың береһендә бер уҡыусыбыҙ шулай тигәйне:"Мин һеҙҙең гәзитте ике йыл алдырҙым да туҡтап торҙом әле. Артыҡ ныҡ фәлсәфәле баҫма...".

Уҡыусыларыбыҙ хәтерләйҙер, беҙ тәүге һандарҙан уҡ иҫкәрткәйнек инде: баҫмабыҙҙың девизы:"Юғарыға ҡарап, фекер ит!". Ижади хеҙмәткәрҙәр алдына ошондай бурыс ҡуйылған: уҡыусылар зиһененә иң юғары ҡиммәттәр тураһында уй һалыу, уларҙы аҡыллы фекергә ылыҡтырыу, һығымталар яһатыу, аңын уятыу, рухландырыу. Әлбиттә, баяғы уҡыусыны ла аңларға була: күптәрҙең аңы әле көнкүреш кимәлендә. Ундайҙар бөгөнгө көн менән генә йәшәй, болғауыр замандың рәте-яйына эйәреп китә алмай ыҙалана, иртәгәһе, көрәсәге тураһында алдан баш ватҡыһы килмәй. Зиһенендәге матур, файҙалы фекерҙәрҙе соҡоп сығарырға, уны үҙенә, балаларына, кешелеккә хеҙмәт иттерергә теләге лә юҡ.

Ә бит халҡыбыҙ ҙа, йәш быуын да шул тиклем мохтаж хәҙер донъяуи кәңәшкә, һүҙгә. Тик беҙ һаман күңелебеҙ, йөрәгебеҙ, мейебеҙ төпкөлөндә йәшереп тотабыҙ уны. Шопенгауэр әйткәнсә йәшәйбеҙ. "Кеше кешегә барыһын да - унан байыраҡ булыуҙы ла, матурыраҡ, белемлерәк, вазифалыраҡ булыуҙы ла ғәфү итә, әммә кеше кешегә унан аҡыллыраҡ булғанды ғына ғәфү итә алмай. Аҡылығыҙҙы йәшерегеҙ", тигән ул. Эйе, аҡылды шул тиклем төпкә йәшергәнбеҙ, уны өҫкә сығарырға атлығып та тормайбыҙ. Асыҡ аңыбыҙҙы эшкә егеп, үҙебеҙ һығымталар яһарға өйрәнһәк, әлбиттә, заман алдыбыҙға ҡуйған теләһә ниндәй фәлсәфәне аңлай алыр инек, теләһә ниндәй ҡаршылыҡты еңер сараһын табыр инек...

Аңлы кеше бер ваҡытта ла: "Гәзитегеҙҙе фәлсәфәле булған өсөн алдырыуҙан туҡтаным", - тип әйтмәҫ. Аңлы кеше ошо баҫманың тап уның өсөн, башҡорт кешеһе өсөн ижад ителеүен аңлар, ул хатта оҡшамаһа ла, баҫманың артабан йәшәүе, тиражы үҫеүенә булышлыҡ итер. Аңлы кеше милләте өсөн файҙалы булған бөтөн эштәргә аҡсаһын да, көсөн дә йәлләмәҫ. Аңыбыҙ уянып етмәгән әле...

Эйе, гәзитебеҙ биттәрендә ябай ғына итеп, һәр кем аңларлыҡ итеп, фәлсәфә, аҡыл һатабыҙ. Замананың бороло штары күп, һин ниндәй юл сатына бороло рға тейешһең, нисек йәшәргә, нисек уйларға тейешһең - ошо хаҡта уйлана быҙ һәм уйландырырға тырышабыҙ уҡыусыларыбыҙҙы ла. Балаларыбыҙ ниндәй тәрбиә алырға тейеш - ошо тура ла ла аңлағанға ишара яһайбыҙ. Был насармы ни? Үҙебеҙҙең ашҡаҙан кимәлендә түгел, ә юғарыраҡ ҡарап фекерләргә өйрәнһәк, әлбиттә, ул кинәйә, ишара, фәлсәфәне ҡабул итер уҡыусыларыбыҙ. Хәйер, ундай уҡыусыларыбыҙ күп бит беҙҙең, Аллаға шөкөр. Биш мендән артыҡ яҙылыусы икән, уларҙың ғаиләләрендәгеләр ҙә уҡый гәзитебеҙҙе һәм беҙҙең тауышты кәмендә егерме-утыҙ мең кеше ишетә. Бәлки, күберәктер ҙә. Сөнки, һөйләүҙәренсә, ауылда бер кеше "Киске Өфө"нө алдыра икән, хужаһы уҡып сыҡҡандан һуң ул гәзит ауыл буйлап ҡулдан-ҡулға китә, имеш...

Беләм, кемдер берәү ошо юлдарҙы уҡығас, "Тағы аҡыл һата..." тип ысҡындырыр, һүҙҙәремде ҡабул итмәҫ. Быныһының да сәбәбен беләм. Ошо риүәйәттә һүрәтләнгән ул сәбәптәр. "Бер саҡ Будда эргәһенә бик белемле, мәҙәниәтле ғалим килгән һәм һорау биргән. Будда хәҙер генә уның һорауына яуап бирә алмауы тураһында белдергән. Ғалим бик ныҡ аптырап:"Ни өсөн яуап бирә алмайһығыҙ, ваҡытығыҙ тармы?" - тип һораған. "Юҡ, ваҡытым етерлек минең, - тигән Будда, - һеҙ минең яуапты хәҙер генә ҡабул итә алмаҫһығыҙ, тип уйлайым". "Ни өсөн?" - тип ныҡышҡан ғалим. "Өс төрлө тыңлаусы була, - тип һүҙен дауам иткән Будда. - Беренсеһе баштүбән әйләндереп ҡуйылған көршәк кеүек: күпме генә һөйләһәң дә, уның башына бер ни ҙә инмәй. Икенсе төрлө тыңлаусы төбө тишек көршәк кеүек: уны мәғлүмәт менән тултыраһың, ләкин тишек көршәктә һыу тотҡарланмаған кеүек, һөйләнгән һүҙ ҙә башҡа һеңмәй, файҙаһыҙға елгә осоп бөтә. Өсөнсө тыңлаусы баштүбән торған йә тишекле көршәк кеүек түгел, ә төрлө сүп, ҡалдыҡ-ҡолдоҡтар менән тулы көршәк кеүек: уға һыу һалаһың, һыу бысранып, ағыуланып тик тора. Һеҙ тап бына ошо көршәк кеүек. Һеҙ шул тиклем күп беләһегеҙ, һеҙҙә һеҙҙең тарафтан аҙағынаса аң менән ҡабул ителмәгән мәғлүмәттәр ҙә етерлек. Ул "сүпле" мәғлүмәттәр һеҙгә мин әйтәсәк яуапты ҡабул итергә ҡамасаулаясаҡ". "Сүпле" мәғлүмәттәр тигәне - ул төрлө икеләнеүҙәр, шикләнеүҙәр, үпкәләүҙәр, үсәүҙәр, үсегеүҙәр, ҡурҡыу-шөбһәләнеүҙәр, көнләшеүҙәр икәнен аңлағанһығыҙҙыр. Уларҙы башыбыҙҙан, күңелебеҙҙән алып ташлайыҡ та, үҙебеҙҙең мейене яҡшы һәм яҡты тормошҡа, күркәм мөнәсәбәттәргә көйләйек. Бер-беребеҙҙе ишетергә өйрәнәйек. Ярҙам итергә кәрәкме ошо ғәмәлдәрҙе атҡарырға? "Киске Өфө" был тәңгәлдә гел һеҙҙең ярҙамсы була ала. Бергә булайыҡ!

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Әйткәндәй...**

**Гәзиткә яҙылыуҙар хәҙер ярты йылға бер атҡарыла икәнен иҫтә тотмайбыҙ шул. Шуға ла яҙылыуҙы оҙайтырға онотҡандар гәзитебеҙгә 17 июлгә тиклем яҙылып өлгөрһә, уны августан алдыра башлаясаҡ.**

**Һәм тағы. 1 июлдән сентябргә тиклем 2010 йылдың тәүге ятыһына ваҡытынан алда "Киске Өфө"гә яҙылыу иғлан ителде. Йәғни ошо ике ай эсендә гәзитебеҙгә элекке хаҡтар менән: 50665 индекслыһына - 294 һум 84 тингә, 50673 индекслыһына - 282 һум 66 тингә яҙылыу мөмкинлеге бар. Ә сентябрҙә хаҡтар бер аҙ ҡиммәтләнер, моғайын.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостанда Вьетнам Социалистик Республикаһы мәҙәниәте көндәре булып үтте. Ошо ваҡиға сиктәрендә Өфөлә Вьетнам сәнғәте оҫталары концерты булды. Унда Вьетнам артистары башҡорт йырҙарын да башҡарҙы һәм ҡурайҙа ла уйнап ишеттерҙе. Ҡунаҡтар Өфө музейҙарын, парктарын ҡараны, республикалағы Вьетнам яҡташтар йәмғиәте эшмәкәрлеге менән танышты. БР Президенты Вьетнам мәҙәниәте көндәрендә ҡатнашыусыларға ҡотлау телеграммаһы ебәрҙе һәм ике республика араһында иҡтисади, сауҙа, мәҙәни бәйләнештәрҙең нығыясағына ышаныс белдерҙе.

✓ Баймаҡ районында "Ҡурай сәскәһе" тигән мәҙәни-лингвистик лагерь эшләй башланы. Унда ял итеүсе балалар башҡорт халҡының йолаларын, мәҙәниәтен, телен һәм тарихын өйрәнәсәк. Ошондай уҡ лагерь бөгөн Ғафури районында ла эшләй. "Имәнкәй" тип аталған был лагерҙа бөтөн республиканан 200-ләп бала ял итә. Һуңғы ваҡытта бындай профилле лагерҙар ҙур танылыу яулай бара, сөнки улар балаларға матур итеп ял итеү, көс туплау ғына түгел, ә һайланған профиль буйынса ниндәйҙер мәғлүмәткә, белемгә, күнекмәләргә эйә булыу мөмкинлеген дә бирә. Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәренән күренеүенсә, бөгөн республикала барлығы 202 профилле лагерь эшләй. Уларҙа 10 мең бала ял итә.

✓ Континенталь хоккей лигаһы - 2009/2010 сезонының хоккей буйынса асыҡ Рәсәй чемпионаты календаре асыҡланды. Өфөнөң "Салауат Юлаев" командаһы тәүге уйынын Рига "Динамо"сыларына ҡаршы 12 сентябрҙә ситтә уйнаясаҡ. 14-16 сентябрҙә юлаевсылар Минск һәм Мәскәү ҡалаларының "Динамо"сылары менән көс һынашып уҙғарасаҡ. Өфө тамашасыһы үҙенең командаһын бары тик 19 сентябрҙә Хабаровтың "Амур"ы менән уйнағанда ғына күрә алыр, ә 22-һе юлаевсылар тағы бер көслө конкурент - "Нефтехимик" менән осрашасаҡ.

✓ Ырымбурҙа VIII Рәсәй этнографтары һәм антропологтары конгресы булып үтте. Рәсәйҙән, сит илдәрҙән барлығы 500-гә яҡын кешене йыйған был форумда Башҡортостандан да 22 кешенән торған делегация ҡатнашты.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# КЕМ КИЛГӘН БЕҘГӘ? ДОНЪЯ ХУЖАҺЫМЫ?

## Барак Обаманы Рәсәйҙә өмөтләнеп ҡаршы алғайнылар...



**Аҙна буйы телебеҙҙә тик Америка ғына. Телебеҙҙә генә түгел, гәзиттәребеҙҙә, телеэкрандарыбыҙҙа. Уйҙарыбыҙҙа хатта. Тегендә Майкл Джексон үлгән. Бында Барак Обама килгән.**

Майкл Джексон хаҡында оҙаҡ һөйләргә түгел. Ғүмер буйына ағарырға (йәғни, тәненең төҫөн үҙгәртергә) тырышҡан был ҡара тәнле америкалы ниндәйҙер (минең өсөн мәҫәлән, бөтөнләй аңлашылмаған) юл менән донъя поп-музыкаһы батшаһы титулын яулап алды һәм вафат булғандан һуң да үҙенә миллионлаған кешенең иғтибарын йәлеп итте. Майкл Джексондың тиреһен ағартырға тырышып пластик операцияларға барыуы, ҡара тәнлеләргә хас тынҡыш танауының формаһын үҙгәртергә маташыуы, психологтар фекеренсә, Америка Ҡушма Штаттарындағы ҡара тәнлеләрҙең ҡайһы берҙәренә хас синдром. Ул "ҡара"ларҙың ҡол булған заманаларынан килә, имеш. Ҡара тәнлеләрҙе мал урынына тотҡан аҡ тәнлеләргә оҡшарға, шулар һымаҡ булырға тырышыуҙан килеп сыҡҡан, баҡтиһәң. Негрҙар тағы ла үҙҙәренең хужаларын эләкләргә яратҡан. Сигаралар тартҡан, виски эскән булып ҡыланғандар, хужалары күрмәгәндә генә уларҙың эшләпәләрен, кейемһалымдарын, күҙлектәрен кейеп ҡарарға яратҡандар, ҡулдарына таяҡ тотоп йөрөй торған булғандар. Хас та майм..., ғәфү, йәмәғәт, джунглиҙа йәшәгән кешегә оҡшаш оҙон ҡойроҡло йөнтәҫ хайуан кеүек инде. Ул заманалар күптән үтте. Хәҙер ҡара тәнлеләр Америка Ҡушма Штаттарында тулы хоҡуҡлы хужа. Улар хәҙер көнө-төнө плантацияларҙа эшләмәй. Улар алдында башҡалар бил бөгә. Бөкмәгәндәрҙе - бөктөрәләр генә. Аңлағандарға ишара был.

Ябай башҡорт күҙлегенән сығып ҡарағанда, Джексонды йырсы тип әйтеп тә булмай бит - тауышы ла, бер ниндәй моңо ла юҡ уның. Нисек итеп тыңларға, аңларға һәм шуныһы ғәжәп, яратырға мөмкиндер инде уны һәм уның, ғәфү итегеҙ, "йырҙарын" - аңлашылмай. Рәсәй ваҡытлы матбуғат саралары иһә шул арала Майкл Джексон менән Людмила Зыкинаның вафаттары араһында ниндәйҙер уртаҡлыҡ табырға өлгөрҙө. Йәнәһе, был донъя менән ике бөйөк илдең бөйөк шәхестәре хушлашты. Уларҙы йәнәшә баҫтырып буламы икән? Уларҙы сағыштырырға тырышҡандар Джексондың баһаһын арттырамы, әллә Зыкинаны поп-идол кимәленә "күтәрергә" маташамы?

Хәйер, үлгәндәрҙең үҙ урыны, ә беҙҙе тереләр көтә. Барак Обама көтә беҙҙе. Америка Ҡушма Штаттарының тәүге ҡара тәнле президентының беҙҙең илгә килеүе оло шаушыу ҡуптарҙы. Ваҡытлы матбуғат саралары уның һәр аҙымын күҙәтеп, һәр бер һүҙен эләктереп алырға әҙер генә торҙо. Ул ҡайҙа барған, кем менән осрашҡан, нимә тураһында һәм нисек һөйләшкән? Путин һәм Медведев хаҡында нимә тип әйткән? Нишләп Владимир Владимирович уны самауыр сәйе менән һыйлаған? Ул самауырҙы нишләп итек менән елпеткәндәр? Махсус рәүештәме, әллә осраҡлы ғынамы? Һәм башҡалар, һәм башҡалар.

Был хәл бер ҙә ғәжәп түгел. Советтар Союзы заманынан шулай ул. Брежнев менән Никсон заманынан уҡ. Рузвельт менән Сталин хаҡында әйтеп тормайым инде. Ваҡыты икенсе булған. Ә бына Ричард Никсон менән Леонид Брежневтың осрашыуы - тарихта ысын мәғәнәһендәге күренекле ваҡиға булып ҡала.

Дөйөм алғанда, Америка Ҡушма Штаттары һәм Рәсәй (йәки СССР) етәкселәре араһындағы осрашыуҙарҙың барыһы ла һуғыш һәм солох, донъя бүлешеү, ике аралағы мөнәсәбәттәрҙе яйлау-көйләү менән бәйле. Эйе, эйе, хас та ир менән ҡатын араһындағы кеүек. Донъяның ике бөйөк һәм ҡеүәтле дәүләте үҙҙәрен аш бүлмәһендә тәрилкә онтап мөнәсәбәттәрҙе асыҡлаған ғаилә башлыҡтары кеүек тота. БМО трибунаһынан ботинка менән АҠШ-ты ҡурҡытырға маташҡан Никита Сергеевич кеүек.

Америка беҙҙең ил өсөн һәр ваҡыт идеологик, сәйәси, иҡтисади дошман булды. Һәр хәлдә, беҙгә шулай аңлаттылар. Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы "икенсе фронт", Американан ленд-лиз буйынса килгән "студебеккер" йөк машиналарын иҫәпкә алмағанда, ике дәүләт араһындағы мөнәсәбәттәр "Ҡыуып етергә һәм уҙып китергә!" (Никита Сергеевич Хрущев осоро), "һалҡын һуғыш" (Леонид Ильич Брежнев заманы) форматтарында ғына булды.

Шул уҡ ваҡытта Американың йәшәү рәүеше совет халҡы араһында үҙенә күрә бер эталон булып торҙо. Көнбайыш дәүләттәрендәге демократия, ирекле баҙар мөнәсәбәттәре, һүҙ азатлығы, әхлаҡи бушаҡлыҡ (ябайыраҡ итеп әйткәндә, енси ireклек), рок һәм поп музыка ритмдары, оҙон сәстәр, Америка джинсылары, кока-кола, поп-корн һәм гамбургерҙар - былар барыһы ла "тимер шаршау" артында ғүмер итергә маташҡан совет йәштәрендә ҡыҙыҡһыныу ғына түгел, көнләшеү һәм уларға тиңләшеү, улар кеүек булырға маташыу хистәрен барлыҡҡа килтерҙе. Советтар Союзы халҡы көнбайыш йәшәү рәүеше менән һоҡлана башланы, уға ярарға маташты - оҙон сәстәр үҫтерҙе, баҙар мөнәсәбәттәре, демократия тип ауыҙ аса башланы. Нисек тә булһа Америка Ҡушма Штаттарындағы көнбайыш тормошона ынтылды. Бер һүҙ менән әйткәндә, маймылланды.

Шулай ҡылана торғас, Америка Ҡушма Штаттарының беҙҙең иң яҡын дуҫтарыбыҙҙың береһенә әүерелгәнен һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ. Ысынлап та, СССР-ҙы юҡҡа сығарып, армиябыҙҙы туҙҙырып, Европа илдәренән китеп, иҡтисадты емереп, тамам бөлгөнлөккә төшкәйнек, АҠШ-тың беҙгә ҡарата мөнәсәбәте ҡырҡа үҙгәрҙе лә ҡуйҙы. Улар дошман булыуҙан туҡтаны, улар беҙгә дуҫ, иптәш һәм хатта остаз булып китте. Күп нәмәгә өйрәтте АҠШ беҙҙе - демократияға, баҙар мөнәсәбәттәренә, кредитҡа йәшәргә, енси ireклеккә, телеэкрандарҙан туҡтауһыҙ ҡойолған ҡанға, көсләүҙәргә һәм үлтерешкә. Ә беҙ етмеш йыл буйына ошо нәмәләргә һыуһаған йәмғиәт, эй өйрәндек тә, өйрәндек. Хатта ҡайһы бер өлкәләрҙә уҡытыусыларыбыҙҙан да арттырып ебәрҙек.

Үткән йылдың көҙөнә тиклем дауам итте был хәл. Бөтә донъя иҡтисади көрсөктөң әҙемтәләре беҙҙең илгә килеп еткәнгә тиклем. Шул саҡ беҙ асыҡтан-асыҡ иғлан иттек - бар бәләләрҙә Америка ғына ғәйепле. Ул донъяны бутай, ул беҙҙе, нефть һәм газ һатып сереп байып барған илде бөлгөнлөккә төшөрҙө. Бер тапҡыр ғына түгел, бер нисә мәртәбә ҡабатланды был тезис. Иң юғары трибуналарҙан, беренсе етәкселәрҙең ауыҙынан.

Барак Обаманан Рәсәйҙә ниндәйҙер яңылыҡ көттөләр. Хәйер, уның нимәнән ғибәрәт булырға тейешлеген бер кем дә аңлатып бирә алманы, шикелле. Рәсәй-Америка мөнәсәбәттәрен "яңынан башлап алып китеү" тигәнерәк өндәү яңғыраны. Хәтерләүемсә, Брежнев менән Никсон осрашҡандан алып ике дәүләт араһындағы мөнәсәбәттәрҙе ҡабаттан яңыртырға маташабыҙ. Горбачев менән Рейган да маташтырып ҡараны. Нимә ҡамасаулайҙыр инде быға - аңлашылмай. Ике дәүләт һуңғы бер нисә тиҫтә йыл эсендә туплап өлгөргән һәм Ер шарын бер нисә тапҡыр юҡ итерлек көскә эйә булған атом ҡоралымы? Әлбиттә. Әммә ул ғына түгел. Ғаиләлә нисек? Ир ҙә, ҡатын да баш булырға маташһа, йортта тауыш тынмай. Икеһе лә муйын ғына булып йөрөһә, тормош бармай. Бер-береһенең һүҙен тыңлап йәшәһәләр, тормош матурлана. Шау-шыу ҙа тыма. Дәүләттәр араһында ла шулайҙыр ул. Америка үҙен бөтә донъяға демократияны индерергә бурыслы тип иҫәпләй. Һәм индерә лә - Вьетнамға, Көньяҡ Америка дәүләттәренә. Ираҡҡа, Афғанстанға. Грузия менән Украинаға. Ҡайҙа ҡорал ярҙамында, ҡайҙа иһә сәйәси технологиялар ҡулланып. Тик Америка демократияһы бар илдәргә лә яраҡлы түгел икән шул. Ҡайһы бер йәмғиәт үҙен бары тик диктатура шарттарында ғына ышаныслы тоя. Ә ҡайһы берҙәргә демократия тамаҡҡа торған һөйәк кеүек. Американы Рәсәйҙәге демократия, граждандар йәмғиәте үҫеше түгел, ә сеймал - нефть, газ, урман, ер аҫты байлыҡтары ҡыҙыҡһындыра, тиҙәр беҙгә. Ҡыҙыҡһындырғас, бирәйек һуң. Ә уларҙан алған аҡсаға кешенең хәлен яҡшыртайыҡ. Беҙгә кем ҡамасаулай ала?

Донъя кимәлендәге лидер, башҡа илдәрҙе алға әйҙәүсе дәүләт булыр өсөн бөгөн ҡорал көсө генә етмәй икән шул. Ябай халыҡ быны яҡшы аңлай. Ә бына шул халыҡ араһынан сыҡҡан йәш етәкселәр - Медведев менән Обама аңлай микән? Һәм тағы ла - атом ҡоралын ҡыҫҡартыу һәм Рәсәй аша Афғанстанға Американың хәрби йөгөн ташыу тураһындағы килешеүҙәр, һис шикһеҙ, кәрәк. Әммә кешеләр был осрашыуҙан халыҡ айырыуса ҙур зыян күргән иҡтисади көрсөктөң әҙемтәләрен бөтөрөү хаҡында килешеү көтмәне микән? Атом ҡоралы менән бергә йәшәргә һуңғы алтмыш биш йыл эсендә аҙмы-күпме өйрәндек инде. Ә бына аслы-туҡлы йәшәргә ғүмер буйы өйрәнһәк тә, бер нисек тә күнегеп булмай.

Беҙ бит теге, джунглиҙарҙа йәшәгән һәм нимә тапҡан, шуның менән тамағын туйҙырған оҙон ҡойроҡло хайуан түгел дә баһа...

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Сибайҙың 1-се дөйөм белем биреү мәктәбенең 10-сы синыф уҡыусыһы Карина Халиҡованың "Сәләмәт тормошто пропагандалаусы йәш лидерҙар төркөмөнөң формалашыуы" тигән фәнни эше наркоманлыҡҡа, наркоенәйәтселеккә ҡаршы көрәш буйынса ғилми эштәр олимпиадаһында икенсе урын яулаған. Башҡортостанда иң яҡшыһы тип танылған был эш Түбәнге Новгород округында үткән турҙа ла ҡатнашҡан һәм был этапта ла Сибай уҡыусыһының хеҙмәте иң яҡшылар рәтенә ингән. Мәскәүҙә үткән финалда конкурс комиссияһы Карина Халикованы икенсе дәрәжәләге премия менән бүләкләгән.

✓Белградта Рәсәй йыйылма командаһы XXV Универсиаданың фехтование турнирында алтын миҙал яулап ҡайтты. Рапира буйынса чемпиондар араһында Өфөнән Артур Әхмәтхужин да бар.

✓Сибайҙың "Гөлдәр" балалар өлгәлә хореография ансамбле Турциянан V Халыҡ-ара балалар һәм үҫмерҙәр ижадының "Уңыш талисманы" фестиваленән Гран-при яулап ҡайтты. Аланье ҡалаһында сибайҙар "Ҡурай сәскәһе", "Ҡара юрға" бейеүҙәре менән ҡунаҡтарҙы таң ҡалдырған. Фестиваль һөҙөмтәләре буйынса ансамбль бейеүсеһе Элина Яхина "Яңғыҙ бейеү" номинацияһында еңгән, ә Ильяс Ишмөхәмәтов менән бергә бейеп улар "Дуэт бейеүе" номинацияһында иң яҡшылар булып танылған. Ансамбль етәксеһе "Иң яҡшы балейтместер эше" номинацияһында беренселекте бирмәгән.

✓15-19 июлдә Ишембай районында "Турфест - 2009" республика йәштәр туристик фестивале үтәсәк. Программала спорт һәм ижади конкурстар ҡаралған.

✓Ғафури районында "Юный спецназовец" тип исемләнгән профилле лагерь эш башланы. Унда аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән 30 бала йөрөйәсәк. Аҙна буйына улар хәрби-спорт сынаҡтырыу үтәсәктәр.

✓Башҡорт дәүләт аграр университетында буласаҡ беренсе курс студенттарына 870 бюджет урыны бүленгән, шуларҙың 525-е ауыл мәктәптәрен тамамлаусыларға тәғәйенләнгән. Әле был уҡыу йортонда барлығы 11330 студент уҡый, шуларҙың 5147-һе - бюджет нигеҙендә белем ала.

✔ ***Башҡорт балаларына инглиз телен өйрәнеү күпкә еңелерәк икәнен билдәләп китер инем. Ике телдең дә йомшаҡлығы, дөйөм өндәр булыуы һөйләшеүҙе ныҡ еңеләйтә. Грамматика яғынан да оҡшашлыҡтар бар.***



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## Өсөнсө тулҡында...

**Быйыл Рособрнадзор июлдә БДИ тапшырасаҡ граждандар категорияһын киңәйтте.**

Бындай мөмкинлек урта махсус белем биреүсе уҡыу йорттарын, һөнәри училищелар, колледждарҙың сығарылыш студенттарына, алдағы йылдарҙа мәктәпте тамамлаусы уҡыусыларға, 11 синыфты сит илдә тамамлаусыларға бирелә. Быйыл төрлө сәбәптәр арҡаһында ваҡытында БДИ тапшыра алмаған, мотлаҡ тапшырыла торған бер фәндән "икеле" алған һәм резерв көндәрҙә имтихан тапшырыу мөмкинлеге менән файҙаланмаған уҡыусылар ҙа ошо ваҡыт эсендә БДИ тапшыра. Теләүселәр төрлө фәндәр буйынса өҫтәмә имтихандар тапшыра ала.

Ваҡытында БДИ тапшыра алмаған сығарылыш уҡыусылары вуздарға документтар биреп, имтихандар үтәсәк пункттарҙа 5 июлгә тиклем теркәлеү үтергә тейеш ине. Ҡалған абитуриенттар ҡабул итеү комиссияларына ғаризаны 25 июлгә тиклем тапшыра ала. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: БДИнан быйылғы йылдың 1 ғинуарына тиклем мәктәпте тамамлаған һәм киске һәм ситтән тороп уҡыу бүлегенә уҡырға инергә теләүселәр, урта һөнәри белеме булған һәм үҙенең һөнәре буйынса юғары уҡыу йортонда белемен дауам итергә теләүсе абитуриенттар, урта дөйөм белемгә эйә сит ил граждандары азат ителә. Улар вузға документтарын 15 июлгә тиклем тапшырырға тейеш.

## Яңы һөнәрҙәр

**Йыл һайын юғары белем биреүсе уҡыу йорттары абитуриенттарға яңы һөнәрҙәр һәм йүнәлештәр тәҡдим итә.**

БДПУ-ның физика-математика факультетында "Нанотехнология" тип аталған яңы һөнәр асылды. БДПУ был йүнәлеш буйынса студенттарға белем биреүгә хоҡуҡ алған беренсе Рәсәй педагогик вуз иҫәпләнә. Уҡытыу эштәре буйынса проректор Максим Михайлов һүҙҙәренә ҡарағанда, был һөнәргә студенттарҙы Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәге ғалимдары менән берлектә уҡытыу ҡаралған. Махсус курстарҙы Санкт-Петербург дәүләт университетының "Нанотехнологиялар" үҙәге ғалимдары алып барасаҡ. Киләсәктә СПДУ-нын физика факультетында бакалавриат һәм магистратура тамамлау мөмкинлектәре лә ҡаралаcаҡ. Быйыл беренсе курсҡа 20 студент ҡабул ителәсәк.

ӨДНТУ-ла ике яңы һөнәр асылған. Уларҙың береһе - механика факультетында, икенсеһе - вуздың Стәрлетамаҡтағы филиалында.

БДУ-ла роман-герман филологияһы факультетында "Тәржемә һәм тәржемә фәне ғилеме" тип аталған яңы йүнәлеш асыу ҡаралған.

... ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ИНГЛИЗ ТЕЛЕН ӨЙРӘНЕҮ ҘӘ...

## заман ҡуйған талап

**Йәштәр алдына бик күп талаптар ҡуйыла бөгөн. Шул талаптарҙың береһе - сит телдәрҙе өйрәнеү. Был белем яҡшы һөнәр алыу өсөн дә, сит илдән килгән ҡунаҡтар, рәсми кешеләр, шулай уҡ Интернет селтәрендә аралашыу өсөн дә, хатта көнкүрештә ябай импорт продукцияларының яҙмаларын уҡып аңлау өсөн дә кәрәк. Бына инде алтынсы йәй Америка-Башҡорт Интерколледжы сиктәрендә ойошторолған йәйге лагерь аҙ тәьмин ителгән ғаилә балаларына инглиз телен тәрән өйрәнеү мөмкинселеген бирә. Ғәҙәттәгесә, лагерь быйыл да Ф. Х. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы базаһында ойошторолдо. Лагерҙа булып, ундағы тәрбиәселәрҙең һәм тәрбиәләнеүселәрҙең фекерҙәрен белештек.**

**Вячеслав ШВАЙКО, Америка-Башҡорт Халыҡ-ара колледжы директоры:**

- "Инглиз телен тәрән өйрәнеү, лидерлыҡ сифаттарын үҫтереү, Америка - Башҡортостан мәҙәниәт-ара параллелдәр" лагеры алтынсы йыл рәттән эшләп килә. Һығымталар бик шатландыра. Балалар әүҙем, күнелле итеп дәрестәргә йөрөй. Быйыл лагерға алты кешенән торған Америка командаһы килде. Улар араһында ун алты йәшлек Бэн исемле уҡыусы ла бар. Ул спорт яғынан бик үҫешкән, үҙ аллы, етди малай. Тиҫтерҙәре менән яҡшы мөнәсәбәттәргә өлгәште. Тимәк, балалар үҙҙәре кеүек үк Америка малайы менән аралаша, һөйләшә алалар. Инглиз телен хеҙмәт, төрлө мәҙәни саралар аша өйрәнеү исулы быйыл тағы камиллашты. Яңыраҡ беҙҙә Америка Ҡушма Штаттарының Екатеринбург ҡалаһындағы консулы килеп китте. Үҙ арала вице-консулдың килеүен көтәбеҙ.

Проект сиктәре киңәйә бара. Быйыл Нуриман районы Красная Горка ауылы уҡыусылары ла инглиз телендә аралашыу мөмкинлегенә эйә булды. Мәскәү ҡалаһындағы АҠШ илселеге ярҙамы менән ике Америка ҡунағы унда булды һәм ун биш көн буйына уҡыусылар менән инглиз телендә аралашты. Красная Горка балалары Өфөгә килеп, Макдональдс кафеһында булдылар. Кафе администрацияһы менән алдан һөйләшеп, тиҙ арала уларға байрам ойоштороҙоҡ һәм уларҙан шул тиклем күп рәхмәт һүҙҙәре ишеттек.

Беҙҙең лагерь проектының төп үҙенсәлеге - аҙ тәьмин ителгән ғаилә балалары өсөн бушлай ял итеү ойоштороу. Әммә теләүселәрҙең күплеген иҫәпкә алып, ата-әсәләрҙең үҙҙәренең инициативаһы буйынса быйыл 136-сы башҡорт лицейында түләүле тапҡыр коммерция нигеҙендә ойошторолдо лагерь.

Башҡорт балаларына инглиз телен өйрәнеү күпкә еңелерәк икәнен билдәләп китер инем. Ике телдең дә йомшаҡлығы, дөйөм өндәр булыуы һөйләшеүҙе нык еңеләйтә. Грамматика яғынан да оҡшашлыҡтар бар.

Бында грамматик яҡтан төҙөк, дөрөҫ һөйләмдәр ҡулланыу әллә ни мөһим түгел. Һөйләгән саҡтарында беҙ балаларҙың хаталарын төҙәтмәйбеҙ, улар оялырға тейеш түгел, киреһенсә, балаларҙа лидерлыҡ сифаттарын үҫтереүҙе маҡсат итеп ҡуйбыҙ. Уйнағанда, төрлө эштәр эшләгәндә бер-береһен аңлау өсөн аралашыу исулы булып тора инглиз теле. Сөнки ошондай шарттарҙа тел бик тиҙ һәм төплө үҙләштерелә.

Америка ҡунаҡтары, ысынлап әйткәндә, быныҡ кеүек лагерҙарҙа түгүе тапҡыр түгел. Башҡа ҡалаларҙа, илдәрҙә инглиз телен өйрәнергә ярҙам итеү тәжрибәһен улар беҙгә, Өфөгә килтерҙе. Улар Интерколледж уҡытыусыларының профессионаллеген, ә уҡыусыларҙың тәртипле, итәғәтле булыуын билдәләй.

Ошо 20-се ҡала башҡорт гимназияһынан ике баланың инглиз теле буйынса конкурста еңеп сығып, Америка Ҡушма штаттарына уҡырға китеүе үҙе үк беҙҙең лагерҙың әһәмиәтен раҫлай. Ансар Закиров өс аҙна буйы үҙенең Америкалағы тиҫтерҙәре менән аралашасаҡ, сит илде күреп ҡайтасаҡ. Ә Лилиә Мостафина инде бер йылға уҡырға китә.

**Джим ХЭВЛИК, уҡытыусы:**

- Мин Техастан килдем. Был лагерҙа спорт дәресен уҡытам, балаларға Америка бейсболы, футболы кеүек уйындар өйрәтәм. Элегерәк профессиональ спортта шөғөлләнә инем.

Өфөлә июлдән башлап йәшәйем. Бындағы балалар бик оҡшай. Улар бик һәләтлеләр, америкалдар менән аралашыу аша үҙҙәренең инглиз телендә һөйләшеү оҫталығын камиллаштырыуға бик етди, яуаплы ҡарайҙар. Балаларҙың ошондай яуаплылығы миңә бик оҡшай.

**Бенджамин КОДЕР, тәрбиәсе:**

- Мин Вашингтон ҡалаһынан килдем. Миңә ун алты йәш. Өфө бик нык оҡшай. Салауат Юлаев һәйкәлен, Дуҫлыҡ монументын күрҙем. Беҙҙең бындағы аралашыу бик ҡыҙыҡ үтә: мин башҡорт балаларына инглиз телен камиллаштырырға ярҙам итәм, улар миңә рус телен өйрәтә. Башҡортса ла әҙ-мәҙ һүҙҙәр беләм. Бер ваҡыт балаларға спорт уйыны ҡағиҙәләрен өйрәткәндә "hot", йәғни "эҫе" тигән һүҙҙе әйткәйнем, улар башҡорт телендә лә "һөт" тигән һүҙ барлығын әйтте. Шулай йәләп башҡортса ла өйрәнеп китермен әле. Проект бик оҡшай, киләһе йыл тағы килергә теләгем бар.

**Тимур ЮЛМӨХӘМӘТОВ, уҡыусы:**

- Лагерҙа мин беренсе йыл ғына. Америкалылар менән аралашыу бик оҡшай. Интернет, спорт һәм музыка дәрестәре айырыуса күңелемә ята. Иҡтисад дәресе лә бар, ләкин ул миңә улай уҡ оҡшамай, унда башты эшләтергә кәрәк. Ә минең йәй көнө ял иткем килә.

Башҡорттарға инглизсә һөйләшеүе еңелерәк икәнен аңланым. Быға телдәрҙең, өндәрҙең оҡшашлығы булышлыҡ итә. Хатта бер ваҡыт Линдси тигән америкалы ап-асыҡ итеп башҡортса "Хәйерле иртә!" тип һаулыҡ һорашты.

**Фатима ЯНБАЕВА яҙып алды.**



## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә быйылғы түгүе ярты йыллыҡта баш ҡала объекттар төҙөлөшө барышы тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнелеүенсә, быйыл 550-560 мең квадрат метр торлаҡ төҙөү планлаштырылған. Алты ай эсендә шуның 212,5 мең квадрат метры файҙаланыуға тапшырылған.

✔Әле Өфөлә Шаҡша-5 микрорайонында ябыҡ башлы каток, Октябрь районында Зорге урамындағы 31-се мәктәп территорияһында физкультура үҙәге, Киров районының Көньяҡ микрорайонында - ер аҫты автостоянкаһы менән бассейн бинаһы, Ленин районында - 39-сы гимназияға төкөтмә, Сипайлово-3 микрорайонында яңы мәктәп кеүек социаль әһәмиәттәге объекттар төҙөлә.

✔"Мираҫ" фольклор бейеү ансамбле Анкарала уҙасаҡ II Халыҡ-ара фестивалдә сығыш яһай. Составында бейеүселәр, йырсы Венера Юлгилдина, ҡурайсы Тимур Юлгилдин, ансамбль етәксеһе Валерий Степанов булған төркөмдө Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимир Баязитов етәкләй.

✔Июндә баш ҡалалағы беренсел торлаҡ баҙарында бер квадрат метр торлаҡтың хаҡы 1,2 процентҡа тиклем кәмегән. Бер бүлмәле фатирҙарҙағы бер квадрат метр - 41 мең һум, ике бүлмәлелә - 42,6 мең, өс бүлмәлелә - 40,8 мең һум торған. Икенсел торлаҡ баҙарында ла хаҡтарҙың кәмеүе күҙәтелгән. Бер бүлмәле фатирҙарҙағы бер квадрат метр 42,3 мең, ике бүлмәлелә - 38,93 мең, өс бүлмәлелә 37,76 мең һум тәшкил иткән.

✔Совет район хакимиәте сәскә үҫтереүселәр һәм йәшелләндереү менән шөғөлләнеүселәр араһында "Сәскәләр карнавалы" тип аталған район конкурсы уҙғарыу тураһында ҡарар ҡабул итте. 3-21 августа уҙасаҡ конкурстың маҡсаты - халыҡҡа экологик йәһәттән тәрбиә биреү, предприятие, ойошмалар, учреждениелар, торлаҡ-эксплуатация участкалары коллективтарының территорияларын йәшелләндереү эшендә тәжрибә уртаҡлашыу. Ҡатнашыусыларҙан ғаризалар 17 августҡа тиклем ҡабул ителә.

✔11-12 июлдә "Нефтяник" стадионында еңел атлетика буйынса БР чемпионаты һәм еңел атлетика буйынса БР Ауыл спорт уйындары финалы үтәсәк. Ярыштар 10.00 сәғәттә башлана.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ҮҘӘГЕ - ЕРЕКТӘ...

## Йәғни ошо үҙәкте барып күреүебеҙ тураһында

(Башы 1-се биттә).

### Башҡорт иле кендеге

Башҡортостанда бөтәһе 4 мең ярымдан ашыу ауыл иҫәпләнә. Уларҙың һәр береһе үҙенә генә хас матурлығы, тәбиғәтенең хозурлығы, унда ғүмер иткән кешеләре менән айырылып тора. Ә Ғафури районының Ерек ауылы тағы ла бер мөһим үҙенсәлеккә эйә - ул географик яҡтан Башҡортостандың ҡап уртаһында урынлашҡан. Бер ниндәй ҙә уйҙырма түгел был, республиканың географик нөктәһе тап Ерек ауылы тирәһендә булыуы ғалимдар тарафынан фәнни яҡтан төпләп иҫбатланған. Шуға ла "Һеҙҙе Башҡортостан ерененең кендегендә күреүебеҙгә шатбыҙ!" тип ҡаршыланы ҡунаҡтарҙы еректәр. Ошо хәҡиҡәтте - Башҡортостан ерененең географик үҙәген ғәмәлдә нығытып, байрам мәлендә ауыл ситендә иҫтәлекле стела ла асылды.

Әммә мөғжизәләр бының менән генә тамамланмай әле. Ерек ауылы янында, "Арҡа" баҫыуының уртаһында ике серле таш - "Йәй таштары" ята. Ауыл халҡы уларҙың береһен "Инәй таш", икенсеһен "Атай таш" тип йөрөтә. Атаһы кеше ҙурлыҡ, инәһе йоморо ваҡ ҡына таштар менән ҡапланған. Уларҙы йыуып-таҙартып тәрбиәләһәң, ямғырлы йылда ямғыр туҡтай, ҡоролоҡ йылында ҡойма ямғырҙар башлана. Бында, боронғолар һөйләүенсә, Тәғзимә исемле әүлиә ерләнгән. Бөгөн дә был урын тирәйүнгә нур сәсеп, халыҡты иманға саҡырып тора. Бына ниндәй мөғжизәле ерҙә йәшәй еректәр! Шуға ла уларҙың рухлы ла, һәр береһенең талант эйәһе лә булыуына аптырарлыҡ түгел. Көрсөк тә көрсөк тип теш сарлағанда һәр ихата алдында әҙерләнгән өҫтәлдәрҙең һый-ризыҡтарҙан һығылыуы ла ғәжәп түгел. Еректәргә Тәғзимә әүлиә рухы муллыҡ та, көс-ҡөҙрәт тә бирәлер, уларҙы кешелеккә ябырылған афәттәрҙән дә һаҡлайҙыр.

### Шиғри күңелле халыҡ

Ерек ауылы боронғо ауылдарҙың береһе иҫәпләнә. Элек-электән бында бик хәлле аҫаба халыҡ йәшәгән, иген үҫтергән, мал көткән, умарта тотҡан, һөнәргә йөрөгән, ҡул эшенә лә оҫта булған. Ил-йортто дошман яуынан һаҡлап, күптәр яу яланында баш һалған, уҡымышлы, алдынғы ҡарашлы кешеләренең күп булыуы менән дә ауыл башҡаларҙан айырылып торған. Шиғри күңелле кешеләр йәшәй бында, тигәйнеләр беҙгә, бының ысынлап та шулай икәнен үҙ күҙҙәребеҙ менән күреп инандыҡ. Шиғри күңелле халыҡ ҡына шиғри һүҙҙе, нәфис һүҙҙе баһалай белә. Данлы ауылдаштарын, ғаилә ағзаларын барлағанда еректәр журналистарын, шағирҙарын иң тәүҙә телгә алды. Ауылдаштары Резедә Мөхәмәтҡолованың ошо байрам уңайынан үҙенең шиғырҙар китабын баҫтырып, халыҡҡа, ҡунаҡтарға өләшеп биреүен оло ваҡиға итеп ҡабул итте еректәр. Һәм тағы. Матурлыҡты төҫлө буяуҙар менән һүрәтләүселәр ҙә күп булып сыҡты был ауылда, күп йорттарҙың ҡапҡаларына, рәшәткәләренә күсерелгән һүрәтһындарға ҡарап "Ах!" итмәү мөмкин түгел ине.

Эйе, Еректә көн күреүсе кесе табын ырыуы вәкилдәре араһында уңғанлыҡтары, бөтмөрлөктәре менән тирә-йүндә дан тотҡан кешеләр күп - быны улар йәшәгән йорт-ҡураларҙың төҙөклөгө лә иҫбатлай. Байрам алдынан ауылдың һәр араһы үҙенең шәжәрәһен өйрәнгән, шәжәрә ағасын төҙөгән. Араларында ун ике быуын ата-бабаларын белгәндәр ҙә бар. Һәр ихатала бер нәҫел-нәсеп йыйылып, байрамда ҡатнашыусыларға үҙ шәжәрә ағасын күрһәтеп, уны бәйән итеп бирҙеләр. Бынан тыш, һәр ара ниндәйҙер йола ла күрһәтте. Кемдер ҡорбан салды, кемдер йәш киленгә һыу юлы күрһәтте, яңы тыуған баланы "һатып алып", уға мулланан исем ҡуштырҙы, хәтер һәм ҡәҙер табынына йыйҙы, улдарын яуға оҙатты, аулаҡ өйгә йыйылып, йәштәр уйынын уйнап күрһәтте. Мөхәмәтҡоловтар нәҫеле "Йәй таштары"н йыуып, һары май менән майлап, ямғыр саҡырыу йолаһын атҡарғайны... оҙаҡ та көттөрмәй, ҡорғаҡһый башлаған ергә ямғыр тамсылары төшә лә башланы. Бына шунан һуң Хоҙайҙың изге көсөнә ышанмай ҡара инде! Бер туҡтауһыҙ һибәләгән йылымыс ҡына ямғырға берәү ҙә һуҡранманы, байрамды ташлап ҡайтырға ла ашыҡманы, киреһенсә, ҡыуанды ғына. Ҡалған тамашалар ямғыр аҫтында дауам итте.

### Ойоштороусыға рәхмәт!

"Шәжәрә байрамы, берҙән, халыҡты берләштерһә, икенсенән, ауылыбыҙ күҙгә күренеп йәмләнеп ҡалды, - тип шатлығы менән уртаҡлашты Ерек башланғыс мәктәбе уҡытыусыһы Рима Кәримова. - Бөтөп барған ауыл һымаҡ ине, хәҙер йәштәр өй һала, быйыл беренсе синыфҡа 5 бала уҡырға килә, тимәк, Еректең киләсәге бар. Ил, район етәкселәренең хәстәрлеге, ярҙамы арҡаһында төҙөкләндереү эштәре лә башҡарыла. 2006 йылда фельдшер-акушерлыҡ пункты асылһа, 2008 йылда яңы автозаправкалау станцияһы төҙөлдө, ауылға һыу үткәрелде, һөтсөлөк фермаһы ла эшләүен дауам итә".

"Был байрамды уйлап сығарған кешегә ҙур рәхмәт!" тигәйне бер инәй дәрәжәле генә ҡунаҡтарҙан торған төркөм алдына сығып. Был һүҙҙәр, әлбиттә, аныҡ кешегә төбәлде - Башҡортостан Республикаһы Президенты Хакимиәтенең бүлек мөдире Ниязбай Сәлимовҡа мең рәхмәтле еректәр. Ауылдаштарына күңел төшөнкөлөгөнән арыныу, ҡотйәмен юғалта барған ауылды төҙөкләндереп, уны күркәмләндереү, рухландырыу сараһын Ниязбай Булатбай улы тәҡдим итә һәм үҙе ең һыҙғанып әҙерлек эштәренә тотона. "Ойоштороусыһы, әйҙәүсеһе булһа, халыҡ күтәрелергә әҙер генә тора ул, - тине арҙаҡлы Баһау старшина ейәнсәре Вәсилә апай Усманова ла. - Бына бит, ауылыбыҙға ҡот инеп, халыҡтың күңеле күтәрелеп, киләсәккә өмөт уянып ҡалды. Шәжәрә ағасында үҙенең исемен күреү ғәмһеҙҙең йөрәгенә лә ут һалғандыр, был донъяла яңғыҙ түгелмен дәһә, туғандарым бар бит, тигән осҡондар тоҡанғандыр".

Ниязбай Булатбай улының эше күптәргә өлгө булырлыҡ. Тыуған яҡтарға ял итергә ҡайтып, ундағы хәл ителмәгән проблемаларҙы, халыҡ араһындағы күңел төшөнкөлөгөн күреп, әрней йөрөйбөҙ, тик бар етешһеҙлектәрҙә етәкселәрҙе ғәйепләүҙән ары уҙмайбыҙ. Һуң, ниңә үҙебеҙ тотоп ярҙам итмәйбеҙ яҡташтарыбыҙға ошо проблемаларҙан ҡотолорға? Халыҡты әйҙәү етә.

**Шулай итеп...**

**Бер нисә быуатлыҡ тарихы булған Еректә Шәжәрә байрамы беренсе тапҡыр ғына уҙғарылды. Ғәҙәттә, беренсе ҡоймаҡ төйөрлө була, тиҙәр. Әммә беҙгә барыһы ла килешле, барыһы ла урынеренә еткереп ойошторолғандай тойолдо. Иң мөһиме - халыҡтың рухы күтәрелде. Заман һынауҙары алдында бирешеберәк киткән ауыл кешеһе ҡайһы саҡта күңелендәге бушлыҡты нимә менән тултырырға белмәй аҙаплана, ә был байрамда халыҡ араҡыһыҙ ҙа уйнап-көлөп, йырлап-бейеп күңел асып була икәнлегенә төшөндө, дуҫлыҡ, туғанлыҡ ептәрен нығытты. Ошо күңел бөтөнлөгө Башҡортостан ерененең үҙәге - Ерек ауылы халҡын ташламаҫына, башҡа ауылдарға ла матур йола булып таралырына иманыбыҙ камил. Шулай булһын, иншалла!**

Ләйсән НАФИҠОВА.








## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Ҡайын еләге



Йәй ағас араһында ҡайын еләге бешә. Һис иренмәй йыйығыҙ, киптереп алығыҙ, күп итеп ашағыҙ. Уның емеше, япрағынан яһалған төнәтмә тәндәге тоҙҙо сығара, бауыр һәм талаҡты дауалай, эс ҡатыуҙан ҡотҡара, ҡан тамырын киңәйтә, юғары ҡан баҫымын төшөрә, ашҡаҙан йәрәхәтен йүнәлтә. Төнәтмә яһау өсөн: 15-20 япраҡҡа бер стакан ҡайнап торған һыу ҡояһың, тәме сығып бөткәс, эсәһең.

### Петрушка

Баҡса һайын хәҙер петрушка үҫә. Бөйөрө ауыртҡандарға ул үтә лә файҙалы:

1) бер төп петрушканы һабағы-тамыры менән ҡаҙып ал, йыу һәм бер стакан ҡайнар һыуҙа 30 минут тот. Сәй итеп эс;

2) япрағынан турама эшләп аша;

3) сей көйө лә услап аша.

### Гөлйемеш

Элегерәк уның сәскәһенән ҡайнатма яһай торғайныҡ. Гөлйемештә витамин күп, дауаһы ла көслө:

1) емешен ылыҫ менән бергә ҡайнатып эсһәң, тын юлдары таҙара, ғыжылдау, сәсәүҙәр бөтә. Тәмәкеселәр өсөн бигерәк тә шифалы;

2) балан менән бергә тамырын ҡайнатып эсһәң, ҡан баҫымын төшөрә, уны рәткә һала.

### Тимер матдәһе

Ҡанда тимер етмәгәнлектән, күптәр уны укол итеп ҡаҙата. Әммә уны баҡсала үҫкән йәшел төҫтәге йәшелсәләрҙе, йәш шалҡан һабағын, горчица, бауыр, бөйөр, йомортҡа һарыһы, бәпембә япрағы, киптерелгән емештәрҙе ашап та дауаларға була. Беҙҙең биология уҡытыусыһы Фәрзәнә Шараповна көйгән икмәк ашарға ҡуша торғайны. Баҡсалағы алмағас төбөнә тутыҡҡан тимерҙе күмергә онотмағыҙ, алмалар тимергә бай буласаҡ.

### Йәшел һуған

Йыл миҙгеленә ҡарап, организм үҙгәрә, "сирләп" ала. Бәғзе берәүҙең яҙ йәки йәй көндәре эсе ауырта, ашағыһы килмәй. Был осраҡта көн һайын 1-2 ҡыяҡ йәшел һуған ашарға һәм бер стакан йылы һөт эсергә кәрәк. Ашҡаҙан үҙ юлына төшә.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✔ *Кешелекте дөйөм әхлаҡ күҙлегенән ҡарағанда, уның иманлылығы - үҙе бер мөғжизә! Тәңрелектең һәр төрлө ҡанлы, хатта вәхшәтле алымдарынан кешелек иман ярҙамында ҡотолған.*



МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең сәхәбәләренең береһе Әбү Һөрәйрә Бәйғәмбәрҙән ишеткән ошондай хикәйәтте һөйләгән.**

# ШАҘРА, ПЕЛӘШ ҺӘМ ҺУҠЫР

Өс йәһүд йәшәгән: шаҙра, пеләш һәм һуҡыр. Аллаһ һынап ҡарау өсөн уларға фәрештә ебәргән. Фәрештә шаҙраға килгән дә унан һораған:

- Һинең иң нығ теләгәнең нимә?

- Таҙа тире, матур тән. Кешеләр ошо ауырыуым арҡаһында минән ситләшәләр...- тигән шаҙра.

Фәрештә шаҙраның тиреһен һыйпаған һәм битендәге таптар юҡҡа сыҡҡан. Ауырыуҙың тәне матурланып, ә тиреһе таҙарып киткән. Шунан һуң фәрештә тағы һораған:

- Ҡайһы хайуан һиңә нығыраҡ оҡшай?

- Дөйә, - тип яуап бирә сәләмәтләнгән кеше.

Һәм уға шунда уҡ быуаҙ дөйә бүләк ителгән. Хушлашҡанда: "Аллаһтың был ниғмәттәре һиңә фатихалы булһын", - тип фәрештә юҡ булған.

Һуңынан фәрештә пеләш башлы кеше эргәһенә килгән һәм унан да һораған:

- Иң кәрәкле нәмәң нимә?

- Бынау пеләш юҡҡа сыҡһын һәм кешеләр минән көлмәһендәр ине.

Фәрештә уның башынан һыйпаған һәм шунда уҡ ҡуйы сәстәр үҫеп сыҡҡан. Фәрештә янынан һораған:

- Ҡайһы хайуан һиңә нығыраҡ оҡшай?

- Һыйыр, - тип яуап биргән пеләш.

Һәм Аллаһ уға быуаҙ һыйыр биргән. Хушлашҡанда: "Был һыйыр ҡотло булһын", - тип әйткән дә, фәрештә юҡҡа сыҡҡан.

Фәрештә һуңынан һуҡырға барып, унан да һораған:

- Һиңә иң нығ кәрәклеһе нимә?

- Аллаһ миңә күреү һәләтен кире ҡайтарһын, мин кешеләрҙе күрә алһам ине.

Фәрештә уның күҙҙәрен һыпырған һәм күреү һәләте кире ҡайтҡан. Фәрештә һораған:

- Бөтәһенән дә нығыраҡ һиңә ниндәй хайуан кәрәк?

- Һарыҡ, - тип яуаплаған һуҡыр.

Һуҡыр бүләккә быуаҙ һарыҡ алған. Бер ни тиклем ваҡыт үткәндән һуң шаҙра менән пеләшкә бүләк ителгән дөйә менән һыйыр быҙаулаған, һуҡырҙың һарыҡы бәрәсләгән. Һуңынан шаҙраның бер көтөү дөйәһе, пеләштең - бер көтөү һыйыры, һуҡырҙың бер көтөү һарығы булған. Һәм фәрештә уларҙың һәр береһенә барып, уларҙы һынап ҡарарға уйлаған. Башта ул шаҙраға килгән һәм әйткән:

- Мин фәҡир һәм бәхетһеҙ сит ил кешеһе. Юлда бөтә аҡсамды тотоноп бөттөм һәм тыуған илемә ҡайта алмай йөрөйөм. Аллаһы һине матур тәҫ һәм буй-һын менән, шундай байлыҡ менән бүләкләгән, шуға ла Аллаһы Тәғәлә хаҡы өсөн, һинән бер дөйә һорайым, мин уның менән өйөмә ҡайтып етер инем.

Элекке шаҙра ҡысҡырып ебәргән:

- Бында байлыҡ теләнселәүсе фәҡирҙәр күп булыр ул. Һәр бер теләнсегә мин берәр дөйә бирә алмайым да инде...

- Иҫеңә төшөрәм: шаҙраң менән кешеләрҙе өркөткән кеше һин түгел инеңме? Ярлы кеше һин түгел инеңме? Аллаһ үҙе бирмәнеме ни һиңә байлыҡты? - тип фәрештә уның элекке хәлен иҫенә төшөргән.

- Юҡ, был байлыҡтар миңә ата-олатайҙарымдан нәҫелгә ҡалды, - тип алдашҡан шаҙра.

- Әгәр ҙә һин алдаһаң, Аллаһы Тәғәлә һине элекке хәленә ҡайтарһын! - тигән дә артабан киткән фәрештә.

Ошонан һуң фәрештә элекке пеләш алдына килеп баҫҡан һәм уны ла һынау алдына ҡуйған. Тегенеһе лә фәрештәнең үтенесенән баш тартҡан. Фәрештә хушлашҡанда уға былай тигән:

- Әгәр ҙә һин алдаһаң, Аллаһ һине элекке хәленә кире ҡайтарһын!

Иң һуңынан фәрештә ҡасандыр күҙҙәренә ҡағылып, күҙле иткән һуҡырға килгән һәм әйткән:

- Мин фәҡир һәм тыуған иленән алыҫта ил гиҙеп йөрөүсе бер бәхетһеҙ кеше. Мин ил гиҙеп йөрөгәнемдә аҡсам бөттө, өйөмә ҡайта алмайым. Мине тик Аллаһ ҡына өйөмә ҡайтарыр һәм һин миңә ярҙам итерһең, тип ышанам. Күҙҙәреңә нурын ҡайтарған Аллаһы Тәғәлә хаҡына, ҡайтыр юлыма түләү өсөн бер һарығыңды бирһәңсе миңә.

Элекке һуҡыр шулай тип яуап ҡайтарған:

- Ысынлап та, мин һуҡыр инем, Аллаһы минең күҙҙәремә нур бирҙе. Мин ярлы инем, Аллаһы мине бай яһаны. Һиңә һарыҡ кәрәк икән, күпме кәрәк, шул тиклем ал. Аллаһы Тәғәлә риза булһын өсөн мин һиңә бер нәмәлә лә баш тарта алмайым.

- Һинең байлығың үҙеңә булһын. Аллаһ һеҙҙең өсөгеҙҙе лә һынап ҡарарға ҡушҡайны. Һәм Ул һинең менән риза. Ә теге икәү - шаҙра һәм пеләш үҙҙәренең яҙаһын үҙҙәре тапты һәм элекке хәлдәренә ҡайтты, - тигән дә фәрештә юҡ булған.

**"Хаҡ динемдә беренсе аҙымдарым" китабынан.**

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

### Тәү башта - иман тураһында

Хөпбүл Ватан мин әл иман! Ватанға мөхәббәт имандан килә, тигәндә аңлата булыр был әйтем һәм ул бынан мең йыллыҡтар алда Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ тарафынан әйтелгән. Был бөйөк әйтемдә "мин" тигән һүҙ "мин"де аңлатмай. Ғәрәп теленең үҙенсәлеге уны беҙгә иман(дан), иман (менән) тип аңларға ҡуша.

Хөпбүл Ватан мин әл иман! Ысынлап та, иман, иманлылыҡ кеше тойғоһоноң өҫкө бер баҫҡысылыр. Ислам тәғлимәтен алып, йәшәү алымдарын, тәртибен бер ҡағиҙәгә һалғас ҡына ҡәбилә-ырыуҙар берләшеп, йәшәү ҡанундарын герәк тә Ватансылыҡ йырҙарын.

Хөпбүл Ватан мин әл иман, тигән һүҙҙәрҙе бөйөк Зәйнулла ишан Рәсүлев үҙенең шәкерттәренә һәр саҡ ҡабатлар булған. Башҡорт атлы дивизияһын яуға оҙатҡанда атаһының һүҙҙәрен улы Абдрахман Рәсүлев тә яугирҙәргә әйтә. Уның был әгзәмле (бөйөк дәрәжәле) һүҙҙәре яугирҙәрҙең күңеленә, йөрәгенә һары май булып яғыла. Бөтә Башҡортостан һәм Европа мосолмандары мөфтөйөнөң был һүҙҙәрен яуҙан яраланып ҡайтҡан Әхмәтхан Ибраһимов (Төстө Көҙәй ауылы), Әүәл Ишбаев (Балбаҡ ауылы), Вәлиәхмәт Ғәйнуллин (Мулдаш ауылы) һәр саҡ һөйләр булды. Минеңсә, иманлылыҡ тигеҙ. Ул иң тәрән, нескә ҡеүәтле тойғо.

### Уралға исем биреүсе - ул башҡорт

"Киске Өфө" гәзите менән "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының "Сәләм" ижад берекмәһе иғлан иткән "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсы халыҡтар тарафынан мәбруҡ-хуп күрелде. Унда Башҡортостаныбыҙ өсөн визит карточкаһы булырҙай, уны донъяла танытырҙай, халҡыбыҙ өсөн үтә әһәмиәтле тәбиғи, мәҙәни, тарихи шөһрәтле, фәхриәлемаҡтаулы объекттар ҡатнашырға тейеш, тигән шарт ҡуйылған. Бына шул талаптарҙан

# ХӨПБҮЛ ВАТАН

## йәғни Уралыбыҙҙың

дөйөмләштереп, бер тәртипкә буйһоноп көн итеп киткәндәр. Кешелекте дөйөм әхлаҡ күҙлегенән ҡарағанда, уның иманлылығы - үҙе бер мөғжизә! Тәңрелектең һәр төрлө ҡанлы, хатта вәхшәтле алымдарынан кешелек иман ярҙамында ҡотолған. Иман халыҡтарҙы бер ергә туплаған, аралаштырған, милләттәрҙең хасил булыуына булышлыҡ иткән. Рухи берҙәмлек дөйөм ҡанундар тыуҙырған, бер ергә, бер илгә бәйләгән, еректергән. Ерле иткән. Иман байрағын күтәреп, атай-олатайҙарыбыҙ меңәр йыллыҡтарҙа үҙ тыуған ерен һаҡлаған, ҡурсалаған, ҡанын да, йәнен дә аямаған. Үҙ ерендә Ватансанлыҡ тойғоһон тыуҙырған уның иманы, үҙ ерененң сиген билдәләгән. Башҡа халыҡтарҙың ерен баҫып кермәгән, үҙе теләп сит халыҡтың ҡанын ҡоймаған. Юлбаҫарлыҡ, баҫҡынсылыҡ - халҡым өсөн иманһыҙлыҡ булған. Боронғо атай-олатайҙары уға киң сәхрәлә ер ҡалдырған. Ул Алтай тауҙарының Тәңре-Хан тауынан төп Урал, унан Ир-әмәле, Ирәмәл һуңы аша болғар ерҙәренә - Оло Иҙелгә үк йәйрәгән. Шуға ла көнсығыш табын ырыуҙарында ғына йырлана торған "Иҫке Урал" йырында түбәндәге һүҙҙәр бар.

Уралдан да ғына Алтайғаса
Йәйерәп ята башҡорт далаһы.
Йырын да күп һинең, моңоң да күп
Әйҙә, йырла, башҡорт балаһы.
Йырҙы ла иманлылыҡ тыуҙыра, би-

Ислам тәғлимәтенең генә төшөнсәһе түгел. Уның асылын кешелек меңәр йылдар буйы үҙ-ара мөнәсәбәттәрендә туплаған, байытҡан. Һәр осор, һәр дәүләт уға төҙәтмәләр бирергә тырышҡан, әммә мөьмин мосолман өсөн ул үҙ йүнәлешендә барған. Батшалыҡтар осоронда ла, бөгөн дә дәүләт иманлылыҡ тураһында ләм-мим һүҙ әйтмәй, уны тик руханиҙар эше тип ҡарарға өйрәнеп алдыҡ. Дәүләт кимәлендә тәғлимәт була алмай әле иман. Шулай ҙа совет дәүләтен күпме генә һүкмәһендәр, ул үҙенең йәшәү осороноң һуңғы ун йыллыҡтарында совет халҡы өсөн әхлаҡи ҡанун яҙҙы. Уны ул "Моральный кодекс строителя коммунизма" тип атаны. Әйтергә кәрәк, Рәсәй тарихында берҙән-бер һәм иманлылыҡҡа һуңғы саҡырыу булды, моғайын. Әлбиттә, боронғо ваҡыттарҙа Тәңре динендә торған халыҡтарға Ислам тәғлимәте ҡанундар, яңы иман кереткән. Иманлылыҡтың сифатын үҙгәрткән. Иманлылыҡ көндәлек тормошта аралашыуҙа ғына сағылмаған, ул Ватансанлыҡты тәрәнәйткән, уға ҡеүәт биргән. Иманлы илен һөйәр, халҡына мөхәббәтле булыр, балаларын тәрән тойғоло итеп тәрбиәләр, уларға әбүҙәр - нур әйәһе булыр. Иманлылыҡ төшөнсәһе ир өсөн дә, ҡатынҡыҙ өсөн дә

сығып, мин түбәндәге атамаларҙы Башҡортостан мөғжизәһе тип атарға тәҡдим итер инем.

Беренсеһе - Урал тауы. Башҡорт Уралы. Ул ни өсөн Башҡорт еререң мөғжизәһе булырға тейеш? Ер шарындағы алты ҡитғаның дүртәүһе һәр яҡлап бер-береһенән диңгеҙ-дарьялар, океандар аша айырыла. Тик ике ҡитғаны - Азия һәм Европаны, башҡа ярҙарын дарьялар йыуһа ла, үҙ-ара сиген Бөйөк Урал тауы бүлеп тора.

Уралға исем биреүсе лә, Уралды Урал итеүсе лә - башҡорт. Үр - ал, йәғни, алда - үр, алда - тау. Алдағы тау. Ҡайһы бер "эҙләнеүселәр", дөрөҫөрәге, көндәш сит ғалимдар уның исемен манси теленә лә бәйләп ҡаңғыра. Башҡорт һәм башҡорт теле берлеге лә данлыҡлы тауға боронғоса ауаҙлы: "Ай, Урал", йәки "Ай, бөйөк!" Әле беҙҙең быуын ишетеп белә: ҡарттар берәй нәмәгә бик-бик инанһа, ҡыуанһа, аптыраһа, ғорурланһа, "Ай, бик Урал, бик Урал!" тиерҙәр ине. Тимәк, Урал һүҙенә тик "алда яткан тау" төшөнсәһе генә һалынмаған. Ул бөйөклөктө аңлатҡан. Уралдың Ер шарында ике ҡитғаны айырып яткан бе-



*✓ Башҡорттоң Урта Уралы баҫып алынһа ла, уның данын, бөйөклөгөн, мөғжизәлеген баҫып ала алманылар. Уның исеменә "Таш", "Билбау" һәм башҡа исемдәр, тамырҙар тағып ҡараһалар ҙа, ул атамалар ҙа йоҡманы.*



рҙән-бер тау булыуы үҙе мөғжизә! Ер йөҙөндә ҡитғаларҙы бүлеп ятҡан, башҡортса аталған башҡа берәй тауҙар армытын беләһегеҙме? Юҡ шул ундай Уралдай тау!

Кешелектең миллионлаған үҫеш юлында, бигерәк тә һуңғы меңйыллыҡтарҙа, халыҡтарҙың бер-береһенең ерен баҫып алыуы, илбаҫарлығы көсәйҙе. Башҡорттоң Урта Уралы баҫып алынһа ла, уның данын, бөйөклөгөн, мөғжизәлеген баҫып ала алманылар. Уның исеменә "Таш", "Билбау" һәм башҡа исемдәр, тамырҙар тағып ҡараһалар ҙа, ул атамалар ҙа йоҡманы. Исеме беҙҙеңсә бөйөк Урал булып ҡалды! Башҡаса үҙгәртә алмаҫтар ҙа.

# МИН ӘЛ ИМАН,

## мөғжизәләрен барлайым...

Ай, Уралым, Уралым,
Уралып ятҡан Уралым.
Илгә дошман килгәндә
Ҡалҡан булған Уралым, -

булып, инде меңәр йылдар беҙҙең төп еребеҙ, үпкә-бауырыбыҙ, йөрәгебеҙ һәм рухыбыҙ булып бергә йәшәйбеҙ.

Күкһел Уралыбыҙ, һис шикһеҙ, Башҡортостан иленең мөғжизәһе! Башҡорт Уралы - бөгөнгө Урта һәм Көньяҡ Урал! Урал мөғжизәләренең бөтәһен дә бер гәзит битендә генә яҙып бөтөрөү мөмкин түгел. Уралдың мөғжизәле ер икәнен аңлатыу өсөн уның Башҡортостанға ингән Учалы районы ерендәге мөғжизәләре тураһында һөйләү ҙә етер, моғайын. Урал тауҙарына исем биргән төп Урал һырты беҙҙең Учалы районының көнбайыш сиге буйлап төньяҡтан көньяҡҡа һуҙыла. Урал тауҙарының көнсығышында, йәки Урал алдында (Предуралье) ике ҙур һырт дөйөм һырттар кеүек төньяҡтан көньяҡҡа түгел, ә арҡырыға, көнсығыштан (Урал алдынан) көнбайыш (Урал аръяғы) йүнәлешенә һуҙылған ике армыт бар. Ул Тағанай (хәҙерге Силәбе өлкәһе сигендә) һәм беҙҙең райондағы Уйташ һырты. Оло Урал, төп Урал, буй Урал шул Тағанайға төртөлөп башлана. Армыт ул тирәлә Шыйҙатҡан тип атала. Өфө - Силәбе юлында Златоуст, йәғни Алтынтамаҡ ҡалаһын һулда ҡалдырып тауға менгәндәге "Европа - Азия" тигән ташбилдә нәҡ тә төп Урал һырты армыты Шыйҙатҡан өҫтөндә тора. Унан көньяҡҡа һуҙылып Ҡылысбай армыты китә. Улар өҫтөнән төньяҡтан көньяҡҡа "Ҡуңыр буға юлы" килә. Ҡылысбай Нар әле тигән текә ҡырласлы тауҙарға еткәс, асалана. Бер асаһы, көнсығыштағыһы, Һары-Түр тип атала. Эске армыты - Әңкә. Һары тур үҙенең алдынан Уй һыуын үткәреп, арҡыры ятҡан Уйташ һыртына текәлеп бөтә.

Әңкә, артындағы оҙон ҡыр һырты менән берегеп, ҡултыҡтары аҫтындағы Ҡара-таштан Уй йылғаһына баш бора. Уй йылғаһы Уп, йәғни Обь йылғаһы бассейны ул. Төньяҡ Боҙло океанға ҡоя.

Әҙ генә алдараҡ яҙған ҡырлас-ҡырлас Нар әле - Нәрәле тауының ҡатлауҙары шишмәләренән Мейесле - Мейәс - Миәс баш ала. Ул да Төньяҡ Боҙло океанға китә. Ике йылға башының араһы тау армыттары аша егерме саҡырым самаһы ла булмаҫ.

Уй йылғаһын көньяҡлап, ярлап ятҡан ҙур армыт - Уйташтың бейеклеге 1020 метр. Әңкә һырты менән Оҙон ҡыр һырты ҡушылып, Сура батыр эпосында һүрәтләнгән Ялпан тау армытына берегә. Ялпантауҙың көнсығыш күкрәген тишеп, Яйыҡ, йәғни Урал йылғаһы баш ала. Яйыҡ, үҙ башында үҙе тыуҙырған һаҙлыҡтар аша һөҙөлөп сығып, һул ярын терәп торған Манғош, Өшөгән армыттарын буйлап, тағы ла Сура батыр эпосындағы "Ҡарсыға урманына" терәлеп, көньяҡ-көнсығышҡа, ялан яҡҡараҡ, Урал алдында йәйрәп ятҡан Ямаһаҙ аша асыҡлыҡҡа сыға.

Ялпан тауҙың көнсығыш иңкешенән, Яйыҡтан көнбайышҡа үрләп, бейеклеге 800 метрға яҡын Нәжем билләүен үткәс, һуҡмаҡ аҫҡа, Әй йылғаһына төшә. Яйыҡ менән Әй йылғалары башы 20 саҡырым да булмаҫ. Яйыҡ үҙе айырым юл ала көньяҡҡа һәм Хазар диңгеҙенә ҡоя. Ул "Урал батыр" эпосында асыҡ һүрәтләнә. Ҡуңыр буға юлы шул Ялпан тау өҫтө менән көньяҡҡа юллана.

Бейек нөктәһе 1206 метр булған Еләкле һырты һәм 1291 метрлыҡ Әбәрәш Баш, 1054 метрлыҡ Ҡара айғыр Ирәмәл алды Әүәләк һыртында. Шул Әүәләк һыртының көнсығыш битенән диңгеҙ кимәленән 750 метр бейеклектән Башҡортостандың иң ҙур йылғаһы Ағиҙел башы шишмәлектәре урғылып сығып, Көньяҡ Урал буйлап сәфәргә сыға. Ағиҙелдең башы Әй башынан туранан-тура ни бары 15 саҡырымдай булыр. Әй - төньяҡҡа, ә Ағиҙел көньяҡҡа юл ала. Ағиҙел менән Яйыҡ башы 30 саҡырым самаһы. Тәүгеһе төп Урал һыртының көнсығышынан, ә икенсеһе Урал тауҙарының дүртенсе ҡаты Әүәләк армытынан баш алып, Сулман, йәки Кама, Булыға, йәки Волга дарьяларын эҙләп, бөтә Көньяҡ Уралды урап, Урал батыр эпосын тыуҙырып, шуның менән тыуған халҡы - башҡортто данлап, күкрәк киреп аға ла аға. Был биш йылға: Ағиҙел, Яйыҡ, Әй, Уй, Мейәс йә Төньяҡ Боҙло океанға, йә Каспий диңгеҙенә ҡоя. Был беҙҙең Урал тауҙарында тыуған мөғжизә түгелме? Был йылға баштары "Урал батыр", "Сура батыр", "Ҡуҙыйкүрпәс һәм Маянһылыу", "Буғай хаким" һәм башҡа эпос, ҡобайырҙарҙа ғына данланмай. Был ерҙәр халҡыбыҙға уның йыр поэзияһының алтын өлгөһө булырҙай "Иҫке Урал", "Илсе Ғайса", "Томан", "Ҡолой кантон", "Бүҙәкәй кантон", "Төхмәт кантон", "Малбай", "Туғанай", "Кәкүккәй", "Зарыҡай", Табын-Күбәләк ырыуы сығарған "Санды үҙәк" һәм башҡа йырҙарҙы ҡалдырған. Был йылғалар, тау армыттары иленең, халҡының азатлығы өсөн йәнен биргән, ҡанын түккән Һары Мәргән, Көсөк, Әлиш, Йосоп Арыҡов, Бәпәнә Төрөпбирҙин, Аҡай, Төлкөсура батырҙарҙы күргән. Мейәс йылғаһы үҙәндәре, Йәм Әле-Биҙәрту - хәҙерге Илмәк тауы ҡырластары Ҡолой кантон Көсөковтың 4-се һәм 5-се кантон ир азаматтарынан 14-се атлы полкты төҙөп, Алтынтамаҡ - Златоуст аша боронғо ебәк һәм һуғыш юлы менән Рәсәй империяһын яҡлап, көнбайышҡа Наполеонға ҡаршы яуға киткәнен дә онотмаған. Был йылғалар, тауҙар 1922 йылда ВЦИК, уның етәксеһе М. И. Калинин тарафынан Учалы районын Силәбе тау округына йолҡоп алыныуына юл ҡуймаған БашЦИК рәйесе Хафиз бабай Ҡушаевты ла хәтерләй. Был ерҙәр комбриг Муса Мортазинды онотмай. Был ерҙең ейәндәре батша Рәсәйе генералдары Ғайса Фәтҡулла улы Рәсүлевты, ағаһы Зәйнулла ишан Рәсүлевты, IV кантон башы генерал Мөхәммәтйән Йыратбай улы Бүҙәкәевте хөрмәт итә.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**Учалы районы.**
**(Дауамы бар).**



ШУЛАЙ ҘА БУЛА

# АФӘТТӘН...

## доға һәм буҙа ҡотҡарҙы

**Ейәнсура районына "Урал батыр" эпосы бәйгеһенә йыйылғанбыҙ. Күңелле сығыштарҙан алған яңынан-яңы тәьҫораттар менән көндәрҙең үткәне лә һиҙелмәй ҡала. Ә кистәрен уҡытыусылар йәнә ҡорға йыйыла. Бер-берең менән аралашып, һөйләшеүҙән үҙеңә дәрт-көс алғандай тояһың. Яҡшы хәбәрҙәр һөйөндөрә, ә ямандары иһә ғибрәт алырлыҡ.**

Стәрлетамаҡ ҡалаһы мәктәптәренең береһенән килгән уҡытыусы менән утырҙаш булырға яҙғайны миңә лә. Әңгәмәләшеү төрлө темаға арналды: дини тәрбиә, милли эсемлектәрҙең шифаһы хаҡында һүҙ сыҡҡас, улы менән булған ҡот осҡос хәлде бер тынала бәйән итте.

- Төшөмдә улымдың тәненә уралған имәнес ҙур йыланды, имеш, һәнәк менән сәнскеләйем. Ырым-фәләндәргә ышанмаһам да, командировканан бығаса булмағанса йөрәкһенеп ҡайтып индем. Фәрештәләр ысынбарлыҡтағы хәлде аңғартҡан булған шул: берҙән-бер улым, минең иң ғәзиз кешем, наркоманға әйләнгән (тәүбә!).

Минең өсөн донъя емерелгәндәй тойолдо. Дуҫ-иштәр, табиптар, таныш-тоноштарҙың кәңәштәре бер ҡолаҡтан инеп, икенсеһенән сыҡты. Мине тотошлайы менән күңел төшөнкөлөгө ялмап алды. Үҙемде ҡайҙа ҡуйырға белмәй, йәнем-тәнем өҙгөләнгәндә, мейемдә өмөт саткыһы яралды. Бәлки, мәсеткә барып, Аллаһҡа ялбарып ҡарарғалыр? Тәүәккәлләнем. Дежурҙа ултырған муллаға эсте бушатҡас, бер аҙ еңеләйеү тойғоһо кисерҙем. Дин әһеленең кәңәштәренә таянып, төрлө сүрәләрҙе өйрәнергә тотондом. Буҙа менән дауалау мөмкинлеген дә мулла әйткәйне. Күрше йәшәгән әбейҙән буҙа ҡойоу серҙәренә төшөндөм. Һәм улымды ошо шифалы эсемлек ярҙамында дауалау эшенә керештем. Әҙәм балаһын тормош һуҡмағында осраған ҡаршылыҡтар һынай, ти. Әлхәмдулиллаһи шөкөр. Динебеҙ һәм шифалы эсемлегебеҙ арҡаһында аҡ үлемдән баламды йолоп ҡала алдым...

Был ҡатындың һөйләгәндәрен гәзит уҡыусыларға ла еткерәйем әле, тинем. Бәлки, кемгәлер файҙаһы тейер был кәңәштәрҙең. Бәлки, һәр йортҡа тиерлек инеп урынлашҡан эскелек тигән афәттән дә ошо доға һәм ... буҙа ярҙамында ҡотолоп булмаймы икән?

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**
**Учалы районы**
**Сораман ауылы.**

***✓ Баш ҡалабыҙ Өфөнөң әле бер кем дә файҙаланмаған бик ҡеүәтле архитектура потенциалы бар. Үкенескә ҡаршы, Өфөнөң үҙ тарихында комплекслы үҫеш, архитектура потенциалы бөтөнләй өйрәнелмәгән һәм асылмаған.***



# ЗАМАНСА БАШҠОРТ ул йәшәргә,

**Гәзиттең быйылғы 21-се һанында баҫылған "Дошмандан ҡурҡҡан - ҡәлғә төҙөгән, ә башҡорттарға ундай ҡәлғәләр төҙөүҙең кәрәге булмаған" тигән әңгәмәһендә тарих фәндәре докторы, профессор Роза Буканова боронғо башҡорттарҙың ни өсөн таш ҡәлғәләр төҙөп ҡалдырмауын түбәндәгесә аңлата: "Ҡәлғә төҙөүҙең башында ҡурҡыу ята. Дошманымдан ҡасып ҡотолам, тип фекер йөрөткәндәр ҡәлғә төҙөргә тырыша…" Башҡорт ерлегендә архитектура ҡомартҡылары булырлыҡ биналарҙың, таш диуарҙарҙың булмауы тап ошо сәбәпкә бәйле һәм был дәлилдәр бәхәсһеҙ. Шулай ҙа профессиональ архитектор был мәсьәләгә нисек ҡарай һуң? Башҡорт архитектураһы бармы? Булһа, ул ниндәй кимәлдә? Киләсәктә башҡорт архитектураһы ниндәй аспекттарға һәм принциптарға таянырға тейешле? Ошо һәм башҡа һорауҙарға Японияла йәшәүсе милләттәшебеҙ, Халыҡ-ара архитекторҙар академияһы профессоры, беҙгә Конгресс-холл, "Аҡбуҙат" ипподромы, Өфө ярымутрауының көньяҡ яры эштәре менән билдәле булған Ришат Усман улы МУЛЛАГИЛДИН яуап эҙләй.**

## Тамырҙарым

Үҙем Өфө ҡалаһында тыуҙым. Атайым сығышы менән Баймаҡ районының Семеновск, әсәйем Йылайыр районының Юлдыбай ауылынан. Бала сағымдың күңелле йәйҙәре башлыса шул ауылдарҙа үтте. Туған телебеҙ, мәҙәниәтебеҙ Арҡайымы булған был төбәк мөхитендә йәшәү минең күңелемдә эҙһеҙ генә ҡалмағандыр, тип уйлайым, һуңынан туҡтауһыҙ ижад ҡомары талап иткән архитектура өлкәһенә килеүемдә лә мин Урал аръяғындағы башҡорт мөхитенә бурыслы һанайым үҙемде. Ҡылғанлы даланың әрем ҡатыш бесән еҫе, һөтлө сәй, сөсө икмәк тәме булмышыма мәңгелеккә һеңеп ҡалған. Мин ул еҫтәрҙе, ул тәмдәрҙе башҡа бер нәмә менән дә бутамайым.

Атайым менән әсәйем хәҙерге 1-се Башҡорт республика гимназия -интернатын тамамлаған. Атайым - Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөүсеһе, әсәйем - уҡытыусы, өләсәйем шул уҡ 1-се Башҡорт гимназия-интернатында баш ашнаҡсы булып эшләне.

Миңә мәктәптә уҡыған саҡта уҡ ике юлдан китеү мөмкинлеге булды. Беренсеһе - спорт, икенсеһе - архитектура. Мәктәптә уҡығанда бокс менән шөғөлләнә инем. Архитектор булыу хыялы өҫкә сыҡты һәм мин урта мәктәпте алтын миҙалға тамамлағандан һуң, Өфө нефть институтының архитектура факультетына уҡырға барҙым. Тағы ла төплөрәк белем алыу теләге барлыҡҡа килде. Уҡытыусылар менән кәңәшләштем дә, Мәскәүгә юлландым. Мәскәү - ул шундай ҡала, унда боронғо урамдарҙан йөрөп тә архитектураға өйрәнергә була. Юғары уҡыу йортонда уҡыған саҡта армияға алындым, һауа десант ғәскәрҙәрендә Литвала хеҙмәт иттем. Армиянан һуң уҡыуымды дауам иттем һәм Австрияла үткәрелгән Халыҡ-ара конкурста архитектура проекты буйынса 1-се урынды яуланым. Австрияға премияны алыуға барыуым минең күп нәмәгә күҙемде асты. Бөтөнләй башҡа төрлө эшләү, ижад итеү һәм йәшәү мөмкинлеген аңлап ҡайттым мин унан. Унда 7 көн булдыҡ. Һәр көн иртән беҙҙе донъялағы танылған архитекторҙарҙың проекттары буйынса барған төҙөлөштәргә алып йөрөнөләр, кистәрен инде архитекторҙар менән фекер алыштыҡ. Мин, ғөмүмән, Австрияға барып, үҙем һайлаған һөнәремдең әһәмиәтен, артабан нисек йәшәргә һәм эшләргә кәрәклеген аңлап ҡайттым. Австрияла алған дәрт менән артабан да конкурстарҙа ҡатнашырға тотондом, уларҙың күптәрендә еңеүгә өлгәштем.

1992 йылда мин үҙемдең буласаҡ тормош иптәшем менән осраштым. Шул уҡ йылда Японияға барыу бәхетенә ирештем. Унда ла бер-бер артлы ике халыҡ-ара конкурста еңеп сыҡтым. Был илдең ҡала төҙөлөшө, архитектура мәҙәниәтен төплө өйрәнергә тотонор өсөн миңә иң тәүҙә япон телен белергә кәрәк ине. 1995 йылда грант буйынса конкурста ҡатнашырға саҡырыу ҙа алдым. Ярты йылдан һуң инде стажировкала ҡатнашыу мөмкинлеген яуланым.

1994 йылдан Мәскәүҙең эре төҙөлөш компанияһында эшләй башлағайным инде, ә 1995 йылда институтты тамамланым. Мәскәүҙең урта өлөшөндә төҙөлөш эштәрен башҡарырға тура килде. Ул саҡта минең иң төп эшем Кремлдең Сенат бинаһын, Рәсәй Федерацияһының беренсе Президентының резеденцияһын реконструкциялау булды. Унда мин интерьерҙар өсөн яуаплы инем. Шулай уҡ Борис Ельциндың эш кабинетын да миңә тапшырҙылар. Ул кабинетта һуңынан Владимир Путин, хәҙер Дмитрий Медведев эшләй. Мин хәҙер ул саҡта үҙем эшләгән кабинетты Үҙәк телевидение "Яңылыҡтар"ында ғына күрәм.

## Ҡала эсендәге ҡала

Ул саҡта миңә параллель рәүештә Өфөнөң 380-се кварталы проектын эшләүҙе тәҡдим иттеләр. Был проект Крупская, Достоевский, Киров, Цюрупа урамдарын үҙ эсенә ала. Нефтселәр мәҙәниәт һарайы тирәһендә ул ваҡытта күп ҡатлы ағас йорттар урынлашҡайны. Башҡортостан Президенты Указы менән унда торлаҡ йорттар һәм офис биналары пропорциональ рәүештә урынлашырға тейеш ине. Беҙ проекттың 1-се стадияһын уңышлы үттек. 2-се стадияһында беҙҙән был проектты икенсе проект ойошмаһына тапшырҙылар. Йәл, әлбиттә. Проектты аҙағынаса еткерһәк, ул квартал биналары көнсығыш һәм көнбайыш архитектураһы симбиозын тәшкил итергә тейеш ине. Беҙ ундағы йорттарҙа "сыйырсыҡ ояларын" хәтерләткән балкон, лоджияларҙы тотошлай быяла менән көпләүҙе күҙ уңында тотҡайныҡ. Был йорттарҙағы беҙ тағы ла ҙур фатирҙарҙа сауналар ҡуйырға ниәт иткәйнек. Шулай уҡ торлаҡ йорт менән офисты бер бинала урынлаштырыу ҙа беҙҙең проектта ҡаралғайны. Был нимәне аңлата? Кеше, хеҙмәткәр үҙе йәшәгән йорттан алыҫ китмәй генә эшенә бара ала. Шул уҡ бинала балалар музыка мәктәбе, балалар баҡсаһы урынлаштырыуҙы ла күҙҙә тотҡайныҡ. Бының менән беҙ баш ҡала архитектураһына яңы стандарт бирергә тырышҡайныҡ.

Үкенескә ҡаршы, әйткәнемсә, был проектты аҙағынаса еткерә алманыҡ һәм мин кире Японияға ҡайтып китергә мәжбүр булдым. Ҡайтып китер алдынан мин Японияның мәғариф министрлығынан стажировка үтеү өсөн грант алыуым хаҡында ҡотлау телеграммаһы алдым. Артабан инде минең япон эпопеяһы башланды. Мин унда Японияның иң эре төҙөлөш компанияһында стажировка үттем. Артабан инде был илдең 220 архитекторы араһында махсус стипендияға лайыҡ булдым. Диссертация яҡларға барлығы 12 архитекторҙы ғына һайлап алдылар. Был стипендияға лайыҡ булыусылар автоматик рәүештә Японияның элитар клубы ағзаһы булып иҫәпләнә. Докторантурала бер йыл уҡығас, йәғни бер йыллыҡ стипендияны файҙаланғас, артабан да стипендиялар яулау ышанысы барлыҡҡа килде. Бер үк ваҡытта университетта уҡыта башланым. "Рәсәй архитектураһына сәйәхәт" тигән хеҙмәт яҙыуға контракт төҙөнөм. Унда илебеҙҙең мең йыллыҡ архитектура тарихы сағылырға тейеш булғас, өс йыл һуҙымында элекке Советтар Союзының бер осонан икенсе осона йөрөп сыҡтым. Был китап 2002 йылда донъя күрҙе. Японияла үткән "Рәсәй архитектураһы даһиҙары" тигән күргәҙмәлә үҙемдең персональ күргәҙмәмде лә ойошторҙом һәм ул иң яҡшыһы тип табылды. Докторантураны тамамлағас, университетта уҡытыуымды дауам иттем, үҙемдең оҫтаханамды астым, Японияла, Рәсәйҙә, Көньяҡ-Көнсығыш Азияла практика үтә башланым.

***Башҡорттарҙың ғаләм, киңлек формалары хаҡындағы күҙаллауҙарын, тәбиғәт, төҫ, яҡтылыҡ менән мөнәсәбәтен анализлап, ҡош ҡауырһыны формаһына туҡталдыҡ. Проект буйынса беҙҙең йорт һауанан ергә осоп төшкән Һомай ҡоштоң ҡауырһынын хәтерләтергә тейеш булды. Проект елпеүес системаһында башҡорт тирмәләренең урынлашыу тәртибен дә хәтерләтә, тирмәләр ете башҡорт ырыуын хәтерләткән ете күсәргә тоташҡан.***

Кәләшем милләте буйынса япон, исеме Сакаэ, йөҙө менән дә, күңеле менән дә ул башҡорт ҡыҙына оҡшаған. Уға беҙҙең милли аштар шул тиклем оҡшаны. Ҡатынымдың беҙҙең һалҡын ҡыштарҙы ғына ауыр үткәреүен иҫәпкә алмағанда, беҙҙә ул үҙен бик уңайлы тоя. Уға шулай уҡ беҙҙең тәбиғәт, экологик яҡтан таҙа аҙыҡ-түлегебеҙ ныҡ оҡшай. Улыбыҙ ике исем йөрөтә. Японсаһы - Кэнзо, беҙҙеңсә Кинйә инде, башҡортсаһы - Илһам.

## Юбилей объекттары

Мине Башҡортостан менән Рәсәй берҙәмлегенең 450 йыллығы уңайы менән юбилей проекттары конкурсында ҡатнашырға саҡырҙылар. Иң тәүге эшебеҙ Өфө ярымутрауының көньяҡ яры проекты булды. Был, әлбиттә, бер генә кешенең хеҙмәте түгел, бындай проект өҫтөндә тотош оҫтахана шөғөлләнергә тейеш һәм проект ҙур финанс сығымдары талап итә. Беҙ конкурста еңеп сығыуға иҫәп тотмаһаҡ та, XXI быуатта Өфө кеүек ҡалала ҡала төҙөлөшө архитектураһы мәсьәләләре нисек хәл ителеүен күрһәтергә теләнек.

Баш ҡалабыҙ Өфөнөң әле бер кем дә файҙаланмаған бик ҡеүәтле архитектура потенциалы бар. Үкенескә ҡаршы, Өфөнөң үҙ тарихында комплекслы үҫеш, архитектура потенциалы бөтөнләй өйрәнелмәгән һәм асылмаған. Беҙҙең проект конкурста беренсе урын яуланы һәм ул проект 2006 йылда Рәсәйҙең иң яҡшы проекты тип табылды һәм бойондороҡһоҙ премия менән бүләкләнде. Премияның бойондороҡһоҙ булыуы яҡшы, сөнки яртыһы донъяның иң танылған архитекторҙарынан торған жюри конкурсҡа тәҡдим ителгән эштәр менән алдан таныш түгел ине. Тауыш биреү "Онлайн" режимы аша Интернет аша башҡарылды.

Артабан беҙгә хәҙер Конгресс-холл тип аталған бина проекты конкурсында ҡатнашырға тәҡдим иттеләр. Был проект Өфөнөң шул уҡ беҙ еңеп сыҡҡан көньяҡ ярына ҡағылғас, минең алға шундай һорау килеп баҫты: хәҙерге заман башҡорт архитектураһы алгоритмы нисек булырға тейеш? Ни өсөн тигәндә, беҙ архитектура тураһында нимә генә һөйләһәк тә, ниндәйҙер үҙ йолалары булған хәҙерге башҡорт архитектураһы хаҡында һүҙ алып бара алмайбыҙ бит инде. Шулай итеп, башҡорт мәҙәниәтен актуалләштереү йүнәлешендә проект барлыҡҡа килде. Башҡорттарҙың ғаләм, киңлек формалары хаҡындағы күҙаллауҙарын, тәбиғәт, төҫ, яҡтылыҡ менән мөнәсәбәтен анализлап, ҡош ҡауырһыны формаһына туҡталдыҡ. Проект буйынса беҙҙең йорт һауанан ергә осоп төшкән Һомай ҡоштоң ҡауырһынын хәтерләтергә тейеш булды. Проект елпеүес системаһында башҡорт тирмәләренең урынлашыу тәртибен дә хәтерләтә, тирмәләр ете башҡорт ырыуын хәтерләткән ете күсәргә тоташҡан. Был бинала хәрәкәт һыҙығы бар, ул һыҙыҡ Салауат Юлаев һәйкәленә йүнәлтелгән. Шулай уҡ ҡала тарихында тәүге тапҡыр Өфөнө заманса итеп йылға менән тоташтырыусы юлдар, баҫҡыстар эшләнде. Ғөмүмән, был проект нигеҙендә ҡаланың яңы ратушаһын барлыҡҡа килтереү маҡсаты ла бар. Ундай ратушалар быҒаса Өфөлә юҡ ине, шуға күрә барлыҡ байрамдар автомобиль юлдарында үткәрелә килде. Беҙҙең бөтә майҙандар ҙа шундай. Ратушаның йылғаға терәлгән урыны һыу юлы менән Өфөгә килеүсе ҡунаҡтар өсөн дә асыҡ. Ундағы тәбиғи амфитеатрҙа төрлө шоуҙар, байрамдар үткәреү мөмкинлеге лә бар. Әгәр ҙә ул шоуҙарҙы, концерттарҙы вертолеттан төшөрөп, Рәсәй, донъя каналдары аша күрһәткәндә, Ағиҙел ярындағы Салауат батырыбыҙ фонындағы был ратуша Рәсәйҙең генә түгел, донъяның мөғжизәле бер урынына әүерелер ине. Зәки Вәлиди һәм Ғафури урамдары мөйөшөндә тоннель төҙөү ҙә маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Конгресс-холл менән никах теркәү йорто араһында тик йәйәүлеләр генә йөрөргә тейештер, тип уйлайым. Ни өсөн тигәндә, бик йыш ҡына никахтарын теркәп сыҡҡан йәштәрҙең Салауат һәйкәле яғына туҡтауһыҙ үтеп тороусы машиналарҙан тапала яҙып йүгереп үткәнен күрергә була. Был бик йәмһеҙ күренеш.

Беҙҙең был проект та еңеп сыҡты һәм 2007 йылда Рәсәйҙең иң яҡшы күп функциялы проекты исемен һәм шулай уҡ бойондороҡһоҙ милли премия яуланы. Был уңыштарға Башҡортостан үҙ тарихында тәүге тапҡыр иреште. Беҙ еңеп сыҡҡан өсөнсө проект - "Аҡбуҙат" ипподромы.

## Бер инештән сыҡҡандар

Башҡорт архитектураһын мин ике аспектта ҡарарға кәрәк, тип уйлайым. Беҙҙең бейеүҙәр киң ҡоласлы, йырҙарыбыҙ моңло, оҙон, һығылмалы.

***✓ Халҡыбыҙҙың архитектор хыялы уның ижадында, орнаменттарында, төҫтәрендә йәшәгән. Беҙгә хәҙер ана шул хыялды заманса архитектура бинаһы итеп ҡалҡытырға һәм бар донъяға күрһәтергә генә кәрәк.***

# АРХИТЕКТУРАҺЫ БАР,
## камиллашырға хаҡлы

Ни өсөн шулай? Сөнки беҙ башҡаларға ҡарағанда тәрәнерәк фекер йөрөтәбеҙ. Әгәр ҙә беҙ башҡорт йыры, ҡурайы тураһында һөйләргә теләһәк - улар бар, башҡорт бейеүе тураһында һөйләргә теләһәк - ул бар, башҡорт аш-һыуы хаҡында белергә теләһәк - ул бар, башҡорт кейемен күргебеҙ килһә - ул бар, һ.б. Былар барыһы ла башҡорт мәҙәниәте тип атаған инештән сыҡҡан. Әгәр ҙә беҙ башҡорт архитектураһын күҙаллаһаҡ, ошондай тәрән инештәрҙән сыҡҡан архитиптар беренсе аспектты тәшкил итер ине.

Икенсе аспект. Әгәр ҙә башҡорт архитектураһы заманса булһын, тиһәк, ул хәҙерге замандың барлыҡ талаптарына яуап бирергә тейеш. Ул экологик йәһәттән зарарһыҙ ҙа, уңайлы ла, гравитация йәһәтенән ныҡлы ла булырға һәм былар барыһы ла башҡорт мәҙәниәте менән бәйле булырға тейеш. Тик шул осраҡта ғына был архитектура башҡорт архитектураһы тип атала ала. Башҡорт архитектураһын тыуҙырыусы архитектор замандың иң һуңғы ҡаҙаныштарын белмәйенсә, архитектура проектын тик башҡорт мәҙәниәтенә генә нигеҙләргә тырышһа, йә булмаһа, киреһенсә булған осраҡта, был архитектура дөйөм иғтибар объекты була алмай барыбер.

Башҡорттарҙың йәшәү рәүеше ниндәйҙер архитектура өлгөһө булырлыҡ диуарҙар төҙөүҙе талап итмәгән. Халҡыбыҙҙың үҙ ерен һаҡлап, быуаттар буйына ихтилалға күтәрелеп, аҙаҡтан эре ҡалаларҙан ситкә этәрелеүе лә уның архитектураһы үҫешен тотҡарлаған, тип иҫәпләргә лә тулы нигеҙ бар. Әммә был факт башҡорт архитектураһы бөтөнләй булмаған, тигәнде аңлатмай. Халҡыбыҙҙың архитектор хыялы уның ижадында, орнаменттарында, төҫтәрендә йәшәгән. Беҙгә хәҙер ана шул хыялды заманса архитектура бинаһы итеп ҡалҡытырға һәм бар донъяға күрһәтергә генә кәрәк. Беҙҙең архитектура юғары мәҙәниәтебеҙ сағылышы ла булырға тейеш. Был - аксиома.

Конгресс-холл бинаһын төҙөгәндә мин уны халыҡ иң тәүҙә милли архитектура өлгөһө итеп ҡабул итер ҙә, ул заман архитектураһы өлгөһө булараҡ баһаланмаҫ, тип шикләнә биреп ҡуйғайным. Киреһенсә килеп сыҡты: уны иң тәүҙә заманса архитектура өлгөһө итеп ҡабул иттеләр ҙә, һуңынан ғына уның милли һыҙатын күрә башланылар. Конгресс-холл бинаһы Рәсәйҙә 2006-2009 йылдарҙа төҙөлгән иң яҡшы өс бина исемлегендә. Тап ошо бина өсөн мин Башҡортостанда тыуып үҫеүсе архитекторҙар араһынан, башҡорт милләтле архитекторҙар араһынан беренсе булып Халыҡ-ара архитектура академияһы профессоры исеменә лайыҡ булдым. Был нимә тураһында һөйләй һуң? Әйтергә кәрәк, заманса башҡорт архитектураһы бар һәм ул йәшәргә хаҡлы. Бына шуны аңлата был күренеш. Беҙҙең үҙ архитектурабыҙға хоҡуғыбыҙ бар.

### Өфөнөң архитектура мөмкинлектәре

Өфөнө ситтән ҡараһаң, уның ҡулдан әүәләп яһалған күркәм тау өҫтөндә ултырғаны күҙгә ташлана. Уны Агиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары уратып алыуы боронғо классик ҡаланың идеаль урыны булыуын иҫкә төшөрә. Былар барыһы ла Өфөнөң тарихы беҙ белгәндән тағы ла боронғораҡ икәнлеген иҫбатлай. Бындай урындың бынан мең, ике мең йыл элек ошо ерҙә йәшәүселәрҙең иғтибарынан ситтә булмағанын да аңлата был күренеш. Шуға күрә Өфө-II ҡаласығын һаҡлау-һаҡламау хаҡында һүҙ бөтөнләй булырға тейеш түгел. Тик уны нисек итеп һаҡларға була? Был мәсьәләне бер нисә вариантта хәл итеп була. Был урынды музей итеп, асыҡ урында ҡалдырырға ла, шул уҡ ваҡытта күп ҡатлы йорттар комплексына ла индерергә мөмкин. Нью-Йорк, Токио ҡалалары миҫалы шул хаҡта һөйләй.

Яныраҡ Өфөгә килеүсе Мәскәү мэрының бер урынбаҫары баш ҡалабыҙҙа күҙгә ташланып барған йорттарҙың аҙ булыуы хаҡында әйткәйне. Был, ысынлап та, шулай. Сөнки Өфө бик оҙонға һуҙылған ҡала. Архитектура йәһәтенән уның һуҙылыуы яҡшы. Тик әлеге төҙөлөшөндә Өфөнөң ошо географик планы бөтөнләй иҫәпкә алынмай. Бер кем дә әле баш ҡалабыҙҙың оригиналь ландшафын, тәбиғи үҙенсәлеген иҫәпкә алмай. Әйтәйек, ҡала бар яҡтан да йылғалар менән уратып алынған. Йылғаларҙың арьяғына ғына сығыуың бурыс, бер ҡасан да, бер кемдең дә аяғы баҫмаған шырлыҡтарға барып юлығаһың. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: ҡатлы-ҡатлы йорттарҙан торған кварталдарҙан йылға аша ғына биш йөҙ метр, бер саҡрым ситтә "тайга" урынлашҡан. Тимәк, ҡаланы шул зоналарға сығарыусы бик күп күперҙәр талап ителә бында. Һәр бер күпер яңы микрорайон үҫешенә импульс бирергә тейеш. Өфөнөң ҙур бер өстөнлөгө шул: уның теләһә ҡайһы урынынан 10-15 минут эсендә тәбиғәт ҡосағына сығып ял итеү мөмкинлеге бар. Токиола, мәҫәлән, бындай мөмкинлек юҡ. Баш ҡалабыҙҙың бындай өстөнлөгөн файҙаланырға, шул йүнәлештә архитектураһын байытырға ғына кәрәк. Мәҫәлән, төшкө ашҡа 1 сәғәт бүленһә, шуның ярты сәғәте юлға китһә, ҡалған ярты сәғәте тәбиғәт ҡосағында тамаҡ ялғарға етә.

Өҫтән Сипайловаға ҡарағанығыҙ бармы? Ҡот осҡос бит. Шул уҡ ваҡытта күҙ ҡарашығыҙҙы йылғаның арьяғына күсерегеҙ. Йылға буйына иғтибар итегеҙ. Унда бульдозер һәм тырма ғына кәрәк. Яр буйында бына тигән йылға буйы паркы эшләргә була. Бының өсөн теләк һәм ихтыяр ғына кәрәк.

Ҡала һәр быуын вәкилдәренән мираҫ булып ҡалған фрагменттар ғына бар. Бер быуын вәкилдәре үҙҙәренсә төҙөй ҙә, унан һуң килгәне үҙенекен һала. Балаларҙың конструктор уйыны кеүек. Былтыр Япония императоры ҡулынан илдең иң юғары наградаһын - рубин орден алыуға өлгәшкән архитектор Кионору Кикутаке әфәнде ҡала төҙөлөшөнөң ҡиммәтле һәм яуаплы эш булыуын билдәләп, был йәһәттән япондарҙың бер мәҡәлен килтерә: "Донъяла ике төрлө һөйрәлеүсе бар: әрмәнде һәм йылан. Әрмәнде үҙенең күҙе алдынан осоп үткән себенде көтөп ултыра ла, тотоп ашай. Әгәр ҙә янынан бер нәмә лә осоп үтмәһә, астан үлә. Ә йылан оҙаҡ ваҡыт ашамайса түҙә ала, кәрәк икән, ботаҡҡа, кәрәк икән, үҫемлеккә әүерелә ала, әммә үҙенә кәрәкле ризыҡты табып ашай. Ул әрмәнденән айырмалы рәүештә, һәр бер осҡан йән эйәһен түгел, үҙенә кәрәклеһен таба". Бының менән нимә әйтергә теләйем һуң мин? Беҙ архитектура мәсьәләһендә тап ана шул әрмәнде хәлендәбеҙ.

**Әйткәндәй...**

**"Конгресс-холл, "Аҡбуҙат" ипподромы кеүек проекттар Рәсәйҙә тик беҙҙә генә һәм донъяның архитектура сәнғәтен тәрән белеүсе ҡунаҡтар: "Һеҙҙең милли архитектура бар икән", - тип һоҡланып бөтә алмай. Быларға үҙем шаһит булғаным бар. Уныһы шулай: тик үҙебеҙ генә быны аңлай алмайбыҙ. Элек, Өфөлә революцияға тиклем һалынған ағас өйҙәр күп сағында, ҡалабыҙҙың ниндәйҙер кимәлдә милли архитектура йөҙө бар ине. Өфөнән бынан ун-ун биш йыл элек киткәндәр, кире ҡайтҡас, уны танымауҙары хаҡында әйтә. Улар хаҡлы: архитектура ҡомартҡыһы булараҡ һаҡларға кәрәк булған бик күп йорттарҙы емереп, урындарына милли архитектура менән бер ниндәй бәйләнеше булмаған Европа стандартындағы йорттар һалып бөткәндәр. Шуға күрә Ришат Муллагилдин һымаҡ архитекторҙарҙың башланғысын хупларға һәм уларҙың эшмәкәрлегенә булышлыҡ итергә кәрәк беҙгә", ти Ришат Муллагилдиндың дуҫы Батырхан Мырҙабаев. Уның һүҙҙәрендә лә хаҡлыҡ бар.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**





**✓ Машинанан төштөм, тейәп алып бара һалайым больницаға, тип уйлайым бит инде. Бына ғәжәп, юҡ бит теге әҙәм. Күҙ менән ҡаш араһында юҡ булды. Бисә эйеләһалып машина аҫтын ҡарай. Унда ла юҡ теге.**

СУРЫТЫУ

# СУРЫТЫУ - АЛДАУ ТҮГЕЛ,

## ул булған хәл-ваҡиғаға биҙәктәр, аҙ ғына шаштырыу өҫтәп һөйләү

### ЗАҺИТТЫҢ МАШИНА АЛЫП ҠАЙТҠАНЫ

Ағайымдың иҫке машинаһында арыу ғына йөрөй башлағайным инде, Шуға яңы машинамды ҡыуып алып ҡайтҡан саҡта, ҡурҡмайынса, кәләште ултыртып алдым. Трассанан имен-аман үттем. Ҡала урамдары бер аҙ шөрләтә бит, әй. Тирә-яҡҡа ҡарау юҡ. Тик алда, тик юлда, тик светофорҙа ғына ике күҙ. Ҡыш, етмәһә, буранлабыраҡ тора. Кәләш - эргәмдә, һиҙәм, миңә ҡарағанда нығыраҡ борсола, тик борсолоуын эш менән баҫа. Миненә ҡарағанда ла ҡатыраҡ уның эше. Ике яҡты ла, артты ла, алды ла ҡарап барырға, миңә ҡиммәтле күрһәтмәләр бирергә тейеш. Юл буйы тулы кеше. Улары ла үҙемдең саҡ килгәнде белмәйҙәр, ултырыуҙы һорайҙар. Бер бармаҡ, ике бармаҡ күрһәтәләр. Эстән генә әйтеп киләм инде, бер-ике түгел, өс бармаҡлыҡ өс кешегә урыным бар ҙа ул, туҡтап, яңынан ҡуҙғалып китеүҙәре мең ғазап. Һеҙгә түгел, заправкаға ла туҡтаманым, бензинды канистрға тултырып алғайным, шуны ҡоя-ҡоя киләм.

*- Бер тапҡыр туҡтап ҡарағайны ул, колонкаға тап килтерә алмай, үтә лә китә, үтә лә китә.*

- Шунан кәләш әйтә, алыҫтараҡ туҡта ла, этеп алып барайыҡ. Кеше юҡта ғына, ти. Йәнәһе, машинабыҙ боҙолған инде. Баш эшләй ул минең кәләштең, Аллаға шөкөр. Таныш-тонош күреп ҡалһа, ғүмерлек лаҡапҡа ҡалырһың, тип, икенсе яйын таптым. Заправка тапҡырында туҡталып өйрәнгәнгә тиклем канистр менән йөрөттөм бензинды. Ҡала урамы буйлап киләм бер саҡ. Кәләшкә әйтәм, ҡәйнештәрҙе алыҫтан уҡ күреп барырға кәрәк, тейем. Кәләш ҡәйнештәрҙең кем икәнен белә инде. Алдан уҡ аңғарткайным.

*- Улары кем була һуң? - тип һорай һөйләүсенең балдыҙы.*

- Бажай ҙа машина йөрөтә бит, белмәйһеңме ни? - Заһит балдыҙына йылмайыбыраҡ ҡарап ала. - Апайыңдан һора. Беҙҙең терминдарҙы вис белә.

*- Гаишниктарҙы шулай тиҙәр. Аҡса һорай ҙа торалар бит, ҡәйнештәр һымаҡ.*

- Апайың хәҙер кемдең ҡасан нимә күрһәткәненән тотош аңлай. Бармаҡ күрһәтһә, нисә кешегә урын һорай, ҡәйнештәр таяҡтарын һелкетеп торһа - туҡтарға кәрәк, йоҙроҡ күрһәткәндәренә үҙе лә күрһәтеп китә.

*- Күрһәтеп китә тип, бер тапҡыр нығ асыуға тейгәс, машина ишегенең быялаһын төшөрҙөм дә ынтылып тороп үҙем дә йоҙроҡ күрһәттем. Яй ғына килгәс, аңларға тейеш бит инде шофер кеше, уҙ ҙа кит, Заһит тиҙлеген кәметә биреп тороп юл бирә. Ни эшләп йоҙроҡ күрһәтергә?*

- Үтә яй килгәс, туҡтатып, еҫкәп ҡарап та бөттөләр инде. Шулай итеп, Медногорск урамы буйлап киләбеҙ. Урам сатына килеп еткәйнек, бер ир ҡыҙыл утҡа яйлап тороп юл аша сығып бара. Тормозға саҡ баҫып өлгөрҙөм. Шулай ҙа иплe генә килеп төкөнөм шикелле тегегә. Ах, харап булдыҡ, тинем дә юл сатында машинаның аварийкаһын тоҡандырып, һикереп төштөм.

*- Йөҙө ап-аҡ булды Заһиттың.*

- Үҙ ғүмерендә кешегә тырнаҡ менән дә сиртмәгән кеше әҙәм тапатһын әле. Ағармаҫ урындан ағарырһың. Машинанан төштөм, тейәп алып бара һалайым больницаға, тип уйлайым бит инде. Бына ғәжәп, юҡ бит теге әҙәм. Күҙ менән ҡаш араһында юҡ булды. Бисә эйеләһалып машина аҫтын ҡарай. Унда ла юҡ теге. Мин әлеге лә баяғы, бисәгә ҡарайым, уның да башы етерлек түгел. Ҡайҙа булды һуң? Юҡ икән юҡ, кит тә бар бит инде. Намыҫ ҡушмай. Булған хәлде күҙ алдынан үткәрәм. Аҡрын ғына сығып бара ине ир кеше урам аша, ҡулында бер әйбере лә бар ине. Мин иплап кенә килеп төкөнөм тегегә. Шунан ул юҡ булды.

*- Әйҙә, ҡуй, яңы бәлә көтөп торма, - тип ҡарайым Заһитҡа, юҡ, ҡуҙғалмай. - Әҙәм балаһы бит, табып, күңелде тыныслап китәйем. Аҙаҡ ҡайҙан табам мин уны, нисек таныйым? - ти.*

*- Аҙаҡ нимәгә кәрәк ул һиңә?*

*- Күңелде тыныслап ҡуйыр өсөн. Юғиһә, машинама ултыра алмам бит башҡаса. Күңелде өйкәп тик торор ул, ти. Тере икәнен, үҙ аяҡтары менән атлап китеүҙәрен күреп тынысланайым, ти.*

- Шул саҡ... Йәшәһен дә йәшәһен инде бисәкәйем, һин дә апайың һымаҡ уяу бул, балдыҙкайым, бажайға йәшәү рәхәтерәк булыр, апайың ул яҡҡа бик сос. Уң яҡлап юл ситендәге бейек көрттә ике аяҡ һелкенеп торғанын шәйләп ҡалған бит, рәхмәт яуғыры бисәкәй. Күп уйлап тормай, һикер тегенең эргәһенә.

*- Мин ни әйтергә белмәй, аптырап ҡалдым да, ана тора теге, тейем. Ҡайҙа тора, ти Заһит. Ана, баш түбән тора, тейем. Ялт итеп ҡалды. Һикерҙе көрткә. Һикереү яғына бирәүгә лә ал бирмәне уҡыған саҡта ла.*

*- Ысынлап, һеҙ еҙнә менән беренсе кластан бергә бит әле.*

- Беренсе класта дәфтәремә ҡара тамыҙғас, тиҙ генә яңыға алмаштырып биргәйне, был ҡыҙыҡай минеке буласаҡ, тип ҡарар иттем.

*- Ете йәштә килә ти кешегә ундай уй.*

- Килә. Зирәк кешегә килә. Беҙҙең нәҫелдә әүлиәләр булған. Шуларҙан ҡалған зирәклек.

*- Шунан, шунан - һикерҙең теге кеше янына.*

- Мин сосмон һеләүһен һымаҡ, ул минән дә сосораҡ булып сыҡҡан. Күҙ асып йомған арала нисек өлгөргән ул көрткә һикереп?

- Үлем ҡурҡынысы янағанда, кешегә әллә ҡайҙан көс килә ти бит ул.

- Шулайҙыр. Атыуса төкөп тә эйҙем, шул ыңғайға юҡ та булды. Тартып сығарҙым тегене. Баштүбән тороп хәле бөткән. Рәхмәттән башҡаны әйтмәй, бахырың. Шул тиклем арыным баштүбән тороп, машина аҫтында ла былай булмаҫ ине, һин бит аҡрын килә инең, моғайын, тапамаҫ инең, тип тә уйлап бөттөм, ти.

*- Танып ҡалдымы?*

- Һөйрәп сығарғас, машина янына шыуып төштөк инде. Ҡайҙа бараһың. Шул арала кеше йыйылып киткән. Хәҙер кеше шундай урынға театрға ҡарағанда эркелешеп килә бит ул. Театр уйлап сығарылғанды күрһәтә, ә был - тере тамаша. Шулайтып, бисә ҡотҡарҙы бәләнән. Теге рәхмәттәр әйтеп, ары атлай ғына башлағайны, көрттә тороп ҡалған пакеты иҫенә төшөп, кире боролған. Бисәкәй шатлығынан тау аҡтарырҙай булып тора ине, көрт йырып инеп тә китте, тегенең пакетын килтереп тә сығарҙы. Бисәләрҙе бушҡа уйлап сығармаған инде Хоҙай олатай. Рәхмәт яуғыры! Шулай ҡайтып еттек ауылға. Хәҙер иртән торһам да, кис ятһам да ирендәр бер доғаны ҡабатлай: Хоҙайыма рәхмәт, бисәм һау булһын.

### АТ ЙӘНЛЕ АТАЙЫМДЫҢ АСЫУЛАНҒАНЫ

Ысын башҡорт минең атайым, шул тиклем ат йәнле. Өйгә ҡарағанда аты янында күберәк булалыр ул. Бер саҡ тай өйрәтергә алып сыҡты мине. Йәй көнө арба урынына сана егеп, бер аҙ йөрөп килдек. Шунан һыбай ҙа йөрөгөләп алды. Уйнаҡлап торған тай ҡулға бирелә башланы, ҡамыт кейҙерһәң, башын эйеп тора, эйәр һалһаң - тыңлаулы ғына көтөп тора. Ҡыҙығып киттем бит мин дә, күҙ ҡыҙа атайға - һыбай сапҡы килә. Бер көн атайым күрмәгәндә генә эйәрләп алдым бит теге тайҙы. Китте бит был ялан буйлап. Әллә кем булып, теҙген тартып килгән мин, ятып, тегенең муйынын ҡосаҡлап алдым.

*- Ат һиҙә бит ул бала-саға ултырғанды. Арт яғын һикертеп, осороп та ҡалдыра ул ҡайһы береһе.*

- Шуға сат йәбештем шул ялына. Муйынын ҡосаҡлап алдым. Уйнаҡлап килә инде. Шуны ғына тоям. Ағас араһына барып инһә, ботаҡҡа һағып ҡалырмын, тип уйлаған булам инде балалығым менән. Юҡ, ялан буйлап елә генә. Шунан иң ҡурҡҡаным күренде.

*- Уныһы нимә тағы?*

- Атай сыҡҡан йоҙроҡ төйнәп. Өйгә табан бороп алып булмай теге тайҙы. Баш бирмәй. Атай тора алмашлап йоҙроҡтарын болғай-болғай. Бөттө баш, тип уйлайым. Ун өс кенә йәштә инем әле. Нисек ыңғайлағандыр менгем - белмәйем, әллә атайҙың йоҙроғо уға тәғәйен тип уйланымы - килеп инде ҡапҡанан. Килеп тә инде, ауып та китте. "Яндырҙың бит атты!"- тип атай килә йүгереп. Икенсе яҡтан тупһала көтөп торған әсәйем һикереп төштө: "Ҡас, улым, ҡас. Атайың нығ ҡыҙған. Ҡаны ятҡас, үҙем барып алырмын", - тине лә, мине, артҡы яҡтағы ҡапҡанан сығып ҡасҡанымса, ҡамабыраҡ торҙо. Ысҡыныуыма ҡыуаныстан, йән-фарман урамдан түбән йүгерә башланым.

*- Сурай ауылының урамы йылғаға табан һарҡыулата төшөп китә. Әхмәтхандар ауылдың үр яғында йәшәй.*

- Эйе. Түбән яҡҡа табан йән-фарман барам бит. Атайҙың: "Бисәкәй, тайға ҡурмас ашата тор, мин хәҙер", - тип, минең арттан төшкәнен һиҙҙем. Бөттө баш, тип уйлайым.

*- Ҡайным олоғайғанса һабантуйҙарҙа йүгереүҙә алдынғылыҡ бирмәне. Биш малайын да бәләкәйҙән йүгертеп сыныҡтырған. Һабантуйҙарҙа иң алдан ҡайным, уның артынан биш малайы килә һәр ваҡыт.*

- Хәтерләйем әле. Иң бәләкәй ҡустыма өс йәш тирәһе ине, тарбаңлап йүгереп килгән була торғайны. Әле инде мин йүгерәм, атай ҡыуа.

*- Былай йүгерә алғас, һау икәнһең, имгәнмәгәнһең икән, шильма малай, - тип әйтә ти ҡайным.*

- "Ике ҡулыңды нығыраҡ һелтә. Нимә, аҫҡа төшөрөп, һәлпелдәтеп киләһең, нисек өйрәтәм мин һеҙгә?" тип әрләй-әрләй килә үҙе. "Ҡайҙа ғына барайым икән?" тип киләм. Ике ҡуллап һелтәп үҙемә көс өҫтәйем тиһәм, һыңар ҡул һәлпелдәп килә. Күтәрелмәй. Ҡыҙыулыҡ менән һиҙмәгәнмен. Атайым әйткәс кенә абайлап ҡалдым - ҡолап киткәнемдә ҡулымды һындырғанмын икән. "Туҡта, тип уйлайым, медпунктҡа барайым. Кеше алдында әллә ни эшләтмәҫ әле. Ҡулды ла бәйләтермен", тип шул яҡҡа ыңғайланым. Атайға һиҙҙермәҫ өсөн, иҙеүҙе ысҡындырып һыңған ҡулды тығып ҡуйҙым да, ары саптым.

*- Ҡулын муйынға аҫып ҡуйҙы булды инде, йәнәһе.*

- Атыу. Һөйәк-мөйәге шылғылаһа, ялғап ҡуйыуы ауырлаша бит. "Мин һине шулай йүгерергә өйрәттемме, шильма малай. Ике ҡулыңды һелтә, ике ҡулыңды", ти атай һаман. Үҙе һаман ҡыуа килә, "Әләктерһәм, бынан ары ат тип ауыҙыңды асмаҫлыҡ итәм мин һинең, шильма малай", тип тә ҡысҡыра. Йүгереп барып индем медпунктҡа. Унда эшләгән медбрат кешеләрҙе лә, малды ла ҡарай торғайны. Өҫтәлендә ятҡан ҙур шприцты күреп ҡалдым да: "Уй, ағай, ҡотҡар мине. Тоҫҡа шприцыңды, мылтыҡ һымаҡ итеп. Атайымды ҡурҡыт. Ул элек-электән уколдан ҡурҡа. Атыу мине ялпаштыра һуға ул", тейем. "Ни булды?" - ти медбрат. " Тайҙы яндырҙым шикелле". "Улай булғас, атайың, ысынлап та, ялпаштыра һине", - тине лә медбрат ағай, шприцты алып, ишек эргәһендә тоҫҡап торҙо. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй атай килеп инде бер саҡ, мин ширма артына йәшенеп ҡарап торам. Атайым шприцты күрҙе лә, күҙҙәре шарҙай булды, артҡа сигенә бирҙе. Шунан ишек артынан ғына: " Ҡустым, әйҙә уколыңды ал да киттек беҙгә. Малай атты яндыра яҙған, шуға йүгереп килеүем", - тип тағы сыҡты ла йүгерҙе. Медбрат миңә ҡараны ла: "Ҡустым, ҡулыңды иҙеүеңә аҫып йүгереп дөрөҫ эшләгәнһең. Һин тағы анау өҫкө бер төймәңде эл дә ҡулыңды күтәреберәк ҡуй. Шунан аҙ ғына көтөп тор, тәүҙә тайҙы ҡарайым. Ул-был була ҡалһа, атайың көн күрһәтмәҫ һиңә лә, миңә лә", - тип, велосипедына атланып, беҙгә ҡарай китте.

*- Атты ҡотҡарҙылармы?*

-Ҡотҡарҙылар. Әсәйем былар килгәнсе әмәлен тапҡан.

*- Оҫта йүгереүе менән бәйле тағы бер мажараһы бар әле Әхмәтхандың, - ти эргәһендә һәр һүҙен йөпләп, ҡыҙығына иң тәүҙә үҙе көлөп ултырған ҡатыны.*

- Уныһы әллә ни түгел дә...

*- Һөйлә, һөйлә. Һин оҫта сурытаһың бит ул. Бесән юҡ ерҙә кәбән һалып ултыртаһың. Милиционер булып йөрөгәнсе, юморист яҙыусы ғына булһаң.*

- Яҙыусы булып эшкиндерә алмаҫ инем мин. Бер урында ун биш минуттан артыҡ ултыра алмайым бит ул. Яҙыусы булыу өсөн иң мөһиме - оҙаҡ-оҙаҡ ултыра алыу һәләтелер ул.

*- Уныһы шулай. Һин хәрәкәтһеҙ булдыра алмайһыңдыр, тейендән дә арттыраһыңдыр, билләһи.*

- Арттырмаһам да, кәм дә түгелмен. Участка милиционеры булып эшләгән саҡ ауылда. Берәү, балыҡ ыуылдырыҡ сәскән саҡта мурҙа һалған да, балығын бушатып тора ине. Өҫтөнә барып баҫтым бит тегенең. Мине күрҙе лә торҙо ла йүгерҙе. Мин төш тегенең артынан. Иң шәп тиҙлеккә һалып йүгерәм, ахыры, теге ситкә тайпылып ҡала, мин уҙам да китәм, уҙам да китәм. Әлеге һарҡыу урамдан түбәнгә табан уҙышабыҙ. Уҙып китә бирәм дә көтөп торам. Теге лә йылғыр, тоттормай. Тағы ҡыуа төшәм.

Теге артына ҡарай-ҡарай ҡаса. Мин тағы уҙып китәм. Шунан: "Мә, тот, гәйепләмен. Һинән ҡасып ҡотолоп булмаҫ. Алда ла Әхмәтхан, артта ла Әхмәтхан", - тип эргәгә килеп туҡтаны.

- *Әхмәтхандан бейегерәк ул көүҙәгә. Әхмәтхан нисәнсе тапҡырҙыр уҙып киткәс, артынан ҡыуып етеп, яурынына ҡулын һалған була ти.*

- Аҙаҡ был ҡылығын аңлатҡан булды ул. Мин әйтәм, бынан ҡасып ҡотолоп булмаҫ. Ғәйебен үҙе танып, үҙе тотолған кешегә ташлама була, шикелле, тинем дә туктарға булдым, тигән була.

## ӘСӘЙЕМДЕҢ ХӘЙЛӘҺЕ

Беҙ игеҙ үҫтек. Кеше түгел, ҡайһы саҡта үҙ әсәйебеҙ ҙә бутай торғайны. Үҫмер саҡ. Киске уйынға йөрөй башланыҡ. Беҙгә уйыны әллә ни түгел ине, ауыл егеттәренең беҙҙе бутауы ҡыҙыҡ була торғайны. Бигерәк тә ситтән килгән, беҙҙе белмәгән егеттәр беребеҙ менән танышып һөйләшеп торған саҡта, иплән кенә икенсебеҙ килеп сыға торғайныҡ. Эй, аптырай торғайнылар. Әлбиттә, һуң ҡайтһаҡ, әсәйҙән эләгә бит инде. Шуға сығыр саҡта әсәйебеҙ эргәһендә торған уятҡысты /будильникты/ иплән кенә артҡа бороп китәбеҙ ҙә, ҡайтҡас, яңынан дөрөҫләйбеҙ. Бер саҡ бороpға онотҡанбыҙ ҙа әсәйем көтөүгә һуңланы, беҙгә ныҡ ҡына эләкте. Шулайын шулай ҙа уйынға сыҡһаҡ, онотолабыҙ ҙа китәбеҙ бит. Бер ваҡыт тағы һуңланыҡ. Иpле генә итеп ишекте асып инәйек, тиһәк, әллә нимә даһыр-доһор итеп ҡалмаһынмы. Әсәйем һикереп килеп торҙо ла будильникты тотоп килә эргәбеҙгә. Бактиһән, әсәйем ишек тотҡаһына күнәк бәйләп ҡуйған икән.

- *Мин алдан инеп бара инем. "Исмаһам, һин алдама, Фәниә. Бына ҡара, сәғәт нисә, ҡара, сәғәт нисә?" - ти әсәйем будильникты күрһәтеп. "Мин бит Ғәлиә" , - тим. "Ғәлиә булһаң ни, сәғәт ҡарай белмәйһеңме? Әйт, сәғәт нисә?" - ти.*

Атайым йоҡоға ҡаты була торғайны. Күнәк даһырлағанда ла уянманы, ә ни эшләптер әсәйемдең шыбырлап ҡына әрләгәненә уяныр китте.

- *Эй, яратты ул беҙҙе. Әсәйемдән һүҙ әйттермәй торғайны. Әсәйем әрләһә лә ул юҡта ғына эләгә ине. "Бер алманың ике яртыһы", - тип ярата торғайны беҙҙе.*

- Фәниә бигерәк шаян булды. Бер саҡ йоморҡа бешереп ашап ултырһаҡ, Фәниәнең йоморҡаһы ике һарылы булып сыҡты. Атайымдың бер алманың ике яртыһы тип йырлаған көйөнә үҙе таҡмаҡ сығарып, әсәйемдән әрләнгәйне.

- *Йомортҡаның ике һарыһын алып һалдым да ҡыҙыҡ булып китте. Хас үҙебеҙ һымаҡ. Беҙҙең яҡта йоморҡа тимәйҙәр, кукәй тиҙәр. Шунан былай тип таҡмаҡланым: "Бер алманың ике яртыһы, бер кукәйҙең ике һарыһы". Шунан әсәйем: "Кит, суҡынған, теләһә нимә һөйләп ултырма", - ти. "Бер ҙә теләһә нимә түгелсе. Беҙҙең дә сәсебеҙ һары, кукәйҙәр ҙә һары, бына бер кукәйҙән ике һары сыҡты", - тип ныҡышам. "Шағирә булыр әле минең Фәниә ҡыҙым. Ҙурайғас, иң тәүге шиғырым, тип яҙып ҡуйырһың ошоно", - тигән булды атайым.*

- Әле лә әсәйемдең әрләгәненә уяныр китте атайым. Йоҡо аралаш нимә тип уйлағандыр инде әсәйемдең әрләгәнен: "Әсәһе, йонсотма әле балаларҙы, сәғәт һорап. Ней баянан бирле сәғәт һорап ныҡышаһың. Йоҡлаһындар. Көтөүгә үҙем уятырмын", - тигән булды.

Көләргә ҡурҡабыҙ. Ауыҙҙы ҡаплап, юрған аҫтына саҡ инеп сумдыҡ.

**(Аҙағы. Башы 27-се һанда).**
**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

## КИТАБЕННАС



**Зилиә Күсербаеваның шиғриәтен мин ыҡсым ғына, күрер күҙгә артыҡ бәрелеп бармаған, әммә зауыҡ менән биҙәлгән, кәртә-ҡураһы төҙөк, муйыл, сейә, алма, балан ағастарына күмелеп ултырған тыныс ҡына ауыл өйөнә оҡшатам. Бүтән замана шағирҙарының ижады ни эшләптер ҙур ҡаланың бейек йорттары, Өфөнөң Сипай бисҭәһе һымаҡ. Тәп-төҙ урамдар, шырпы ҡаптарындай бер үк төрлө йорттар кеүек шыҡылдап торған рифма, башынан аҙағынаса дөмбөр һуғыуына ҡоролған эстрада музыкаһының ритмы, береһенең артынан икенсеһе теҙелгән "Газель" маршруткаларындай строфалар кеүек тойола миңә улар. Зилиәнең өйөнә шау-шыуһыҙ ғына яҙ килә, емеш-елләгән бешереп йәй етә, эсте бошороп көҙгө ямғыр яуа, мөрйәһенән шыйыҡ ҡына төтөн сығартып оҙон ҡыш тенҡәне ҡорота. Бөтәһе лә бар был күркәм донъяла. Шатлыҡ-ҡыуаныс килһә, бар ауылға етерлек булыр, ҡайғы ишек ҡаҡһа, бер үҙе йөрөмәҫ, һөйөү инде, һис шикһеҙ, аҡ фәрештә һымаҡ саф торор, ғүмер - йәшәп туйғыһыҙ, үлем - тәҙрәнән инер һорамай.**
**Шағирәнең күңел моңдарына төрөнәһең дә, был юлдарҙы ҡайҙалыр йыраҡта йәшәгән, күреп белмәгән кеше түгел, һин үҙең сығарғанһың кеүек тойола башлай. Йә булмаһа, уҡып ултыраһың да, ян-яҡтағыларҙы аптыратып ҡысҡырып ебәрәһең: "Телеңдән һөйөнгөр, был тиклем дә оҫта итеп әйтә белер кәрәк бит, әй!"**

**Ғәлим ХИСАМОВ.**

# ШИҒЫР ЯҘЫП ЮШАТЫРҒА ҺАЛДЫМ,

## Уҡырһығыҙ табып аҙаҡтан...

### Үҙем һәм һүҙем

*Күңелдәге телдә булғас,*
*Уй яҡты, асыҡ йөҙөм.*
*Һәр һүҙем минең - намыҫ ул,*
*Һәр һүҙем ул - мин үҙем.*

*Һәр һүҙем үҙем булһа ла,*
*Тик үҙем - һүҙем түгел.*
*Һүҙҙәр күңелгә һыйһа ла,*
*Һүҙҙәргә һыймай күңел.*

*Һөйөүҙең утлы һулышын*
*Илтеүсе һиңә - һүҙем.*
*Утлы һулыш менән һулап,*
*Һөйөүсе һине - үҙем.*

### Атайым йыры

*"Машинаның тәгәрмәсе*
*Ниңә һигеҙ булмаған?*
*Был донъяның рәхәттәре*
*Ниңә тигеҙ булмаған?"*

*Тип йырланы атай йырын*
*Йөҙөн тултырғанында.*
*Бер быуат ғүмерен байҡап,*
*Уйлап ултырғанында.*

*Тыуған ерем ожмах, тиеп,*
*Йәннәт илем тигәнен.*
*Үҙем ологайғас белдем*
*Йөҙйәшәр атай хәлен.*

*Йәшәүҙең йәмһеҙ мәлдәрен*
*Бер кемгә һиҙҙермәне.*
*Аҡ һөт тәсләә сал сәстәре*
*Ҡойолоп өлгөрмәне.*

*Атай, хәҙер бәгзеләрҙең*
*Машиналары һигеҙ.*
*Һин киткән тарафтар ғәҙел,*
*Рәхәттәре лә тигеҙ.*

### Ҡанун

*Инәлмә әхлаҡ хаҡына,*
*Ялыҡтырҙы - ялынма.*
*Оҫҡон эҙләп һүнгән көлдән,*
*Ҡуй, йыуатма, алдама.*

*Хоҙай, имеш, әйткән тиҙәр:*
*Бер яҡшыға - бер яман.*
*Бер яҡшыға - бер яҡшы, тип*
*Бик һирәк ҡабатлаған.*

### Һыуыҡ

*Өйөм һыуыҡ.*
*Һыуыҡ күңелем.*
*Урамда ла һыуыҡ хөкөмдар,-*
*Үтмәҫ тәсләә әсе бурандар,*
*Онотолдо йәйҙә булғандар.*
*Ҡояш ҡасҡан Ҡаф тау артына,*
*Елдәр генә хужа донъяла.*
*Мин арыным йылы күрмәүҙән,*
*Мин талсыҡтым тылсым эҙләүҙән.*
*Бурандарға дусар ғүмерем,*
*Йәшәү йөмен ҡайҙан эҙләйем?*
*Ҡарға әйләнеп кенә елберҙәп,*
*Мин елдәргә үрелеп иҫәйем.*

***

*Тәҙрә ас та, мөгжизәгә юлыҡ,*
*Таңда тәҙрә астым - йәшәрҙем.*
*Был донъяның сихри мәлдәренән*
*Һандуғастар моңо сәсрәне.*

*Бил дә талмай, күҙем күрер булды,*
*Онотолдо һыҡтау, әрнеүҙәр.*
*Бер иланым бәхетемә сәсәп,*
*Берсә ауыҙ йырҙым, ай, йүләр.*

*Ерҙә мәңге йәшәр кеүек булдым,*
*Сәскәләргә генә күмелеп.*
*Баҡсамдағы алма ағасынан*
*Бер ҡыҙылын өҙҙөм үрелеп.*

*Ҡыҙыл алма тел йоторлоҡ һутлы,*
*Шәфәҡ ҡанымдамы яралған?*
*Ап-аҡ муйыл әле был ҡыҙылдың*
*Бер тамсыһын ғына ал(а)алған.*

*Күреремде күрәм, түргә менмәй,*
*Тәҡдирҙәрҙән булып разыйҙар.*
*Һандуғастар, гүйә, бәхилләшеп,*
*Моңдо көрәк менән ҡаҙыйҙар.*

*Китәмме ни? Ваҡыт етәме ни?*
*Ерем,*
*Бәхиллегем һиңә бирәйем.*
*Йомшаҡ тупрағыңа бер моң булып,*
*Бер йыр булып һеңеп инәйем.*

*Ҡуш усыма алдым ҡайын һутын,*
*Ғолҡолдатып йотам сәмләнеп.*
*Юлдан киләм бурлаҡ кеүек һөйрәп*
*Үҙ-үҙемдән төшкән шәүләмде.*

### Мин ҡастым

*Мин ҡастым*
*Үҙемдән, һинән, илемдән.*
*Мин ҡастым тапалған аҙмыштан*
*Алыҫҡа. Ел дә етмәгән тарафҡа.*

*Йәнәһе минең тормошта*
*Яңы таң атты.*
*Ер кеүек түнәрәк йәшәйеш*
*Мине яңынан тапты.*

***

*Шиғыр яҙам, Юшатырға һалам,*
*Сер һаҡлайҙар көмөш тулҡындар.*
*Һыуҙан таба алһа килер быуын,*
*Ҡыҙыҡһынып, бәлки уҡырҙар.*

*...Уҡыу йорто һаман урыҫ телле,*
*Ауылым таңы ата аҙанһыҙ,*
*Сәңгелдәктән шулай асылғас,*
*Тыуған телен белмәй иманһыҙ.*
*Сит-ят булып улар ҡыҙыл һүҙҙән,*
*Ау урәләр күҙе асыҡҡа.*
*Ҡара ауҙың мәкер тоҙағында*
*Ҡан төкөрөп киләм аулаҡта.*

*Күрмәһендәр минең тонсоҡҡанды,*
*Үлем инем, әле иртәрәк.*
*Ер бүләләр, миңә өлөш сыҡмай,*
*Миңә ике аршин ер кәрәк.*

*Мин килмешәк атай тыуған илдә,*
*Кулак булған, имеш, ҡартатай.*
*Яҙ килтерәм тием түңган ергә,*
*Яңғыҙ ҡарға ғына ҡарҡылдай.*

*Ер бүләләр яңы инҡилапта,*
*Харам ашап үҫкән үрмәксе.*
*Тик ул ғына кеше, супер булған,*
*Кәрһеҙ, түлһеҙ, ике мөгөҙлө,*
*Ҡап ҡорһағы аяҡ күрмәй,*
*Әҙәм яҙмышына бер күҙле.*

*...Их, булманы кеше матурлап,*
*Үҙем миктәп бөттөм аҙаптан.*
*Шиғыр яҙып Юшатырға һалдым,*
*Уҡырһығыҙ табып аҙаҡтан.*

### 22-се дауахана, Өфө

*Мин уйланам, мин борсолам,*
*Яман уй иҙә башты.*
*Йәнәһе мин булмаһам,*
*Нишләрҙәр минән башҡа?*

*Йоҡлай алмай ятҡан булам,*
*Йәнем һыҙлай, көйөнә.*
*Ә донъяның мәшәкәте*
*Тәгәрәй үҙ көйөнә.*

*Эй уйланам, эй борсолам,*
*Кәйеф тә юҡ, хәл дә юҡ.*
*Ә тормош алға китһә лә,*
*Әллә мин бар, әллә юҡ.*

### Киленемә

*Иртән йылы һыуҙар менән*
*Йыуыныу рәхәт икән.*
*Хөрмәт иткән кешем минең*
*Улымдың йәре икән дә,*
*Ул минең килен икән.*

*Хуш еҫле сәй өҫтәлендә,*
*Яҡты йөҙлө кем икән?*
*Инсафлы, әҙәпле бала*
*Улымдың йәре икән дә,*
*Ул минең килен икән.*

*Тып-тып баҫып, өйҙө нурлап*
*Нуриям йөрөй икән.*
*Тулған айым, көмөш тояҡ*
*Улымдың ҡыҙы икән дә,*
*Килендең нуры икән.*

**Зилиә КҮСЕРБАЕВА.**
**Көйөргәҙе районы**
**Аҡһары ауылы.**

✓ *Әле ҡиммәтен тулыһынса аңлап бөтөрмәһәк тә, кеше тауышы үҙе лә дауалау көсөнә эйә. Көйҙөң дауалау үҙенсәлеген ҡулланыр өсөн яғымлы көй тыңларға һәм Ҡөрьән уҡырға кәрәк.*



МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

**Борон-борондан медиктар, иң беренсе осраҡта мосолмандар, көйҙө дауалау сифатында ҡулланған. Ислам донъяһында ла махсус дауалау үҙәктәре асылған: VIII быуаттың башында уҡ Фес (Марокко) ҡалаһында; IX быуатта Бағдадта һәм Дамаскта; 1279 йылда Алеппола был үҙәктәр үҙ көсөнә ингән. Бында ауырыуҙарҙы үҙенә тура килгән көй менән дауалағандар.**

# ҠОЛАҒЫҢ МЕНӘН ТЫҢЛА ЛА...

## көй менән дауалан

1284 йылда Каирҙа Әл Мансур Сәйфетдин Калавун Мансурийа исемле кеше шифахана төҙөтә. Был шифаханаларҙа көй менән дауалағандар, ул ысынлап та ауырыуҙың хәлен яҡшыртҡан. Бынан тыш, махсус эшкә ялланыусылар ауырыуҙарға көлкөлө хикәйәләр һөйләй торған булған. Ошо уҡ шифаханаға матур тауышлы мөьәзиндар дини йырҙар йырларға саҡыртылған. Шул рәүешле ауырыуҙарҙың һыҙланыуҙары бөтөп ҡалған. Был шифаханала әлеге көндәрҙә лә дауалауҙың ошо ысулдары киң ҡулланыла. Бөгөн ҡайһы бер шифаханаларҙа был ысул телевизор, радио һәм компьютер ярҙамында алып барыла.

Кеше организмының 60-70 проценты һыуҙан тора. Шул сәбәпле, һыу беҙҙең организмда тауыш тирбәлеүҙәре өсөн бик яҡшы үткәргес булып тора. Беҙ ҡолаҡтарыбыҙ менән генә түгел, ә бөтә күҙәнәктәребеҙ менән был тирбәлеүҙәрҙе тоябыҙ. Ығы-зығы йәки көслө тауыш беҙҙе стресҡа килтерә, кәйефебеҙҙе боҙа, төшөнкөлөккә бирелдерә, һәм беҙҙең иммун системаһын көсһөҙләндерә. 90 децибелдән юғары тауыштар стресс барлыҡҡа килтерә һәм ҡолаҡты һаңғыраулата. Др.Пиерс Дж.Ховард нығ юғары сифатлы тирбәлеүҙәр беҙҙең аңыбыҙға алкоголь һәм наркотик кеүек үк тәьсир итә һәм һүлпәнлеккә килтерә, һуңынан буйһоноусанлыҡҡа алып бара, тип билдәләй. Тауыштар шулай уҡ әсә ҡарынындағы яралғыға ла тәьсир итә. Яралғы 16-сы аҙнаһында уҡ ишетә, тоя башлай.

"Нью-Йорк Стрэнг" яман шеш ауырыуҙарын иҫкәртеү үҙәгенән Митчел Гейнор музыканың һауыҡтырыу үҙенсәлеге тураһында былай тип әйтә: "Хәҙер врачтар гармониялы музыка менән һауыҡ араһында бәйләнеш барлығына ныҡыраҡ инана бара. Әгәр ҙә беҙ яҡшы кешеләр һәм аһәңле көй мөхитендә булһаҡ, үҙебеҙҙе яҡшы тоясаҡбыҙ. Мин ягымлы тауыш һәм аһәңле көйҙән башҡа кешегә һәр яҡтан яҡшы тәьсир иткән һәм тормошон яҡшыға үҙгәрткән бер нәмәне лә тапманым. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Моцарт һәм Вивальдиның музыкалары яралғының йөрәк тибешен әкренәйтә, шулай уҡ ҡапыл эшләгән хәрәкәттәрен кәмetә. Шул уҡ ваҡытта рок һәм поп-музыка балаға тынысһыҙлыҡ килтерә".

Әле ҡиммәтен тулыһынса аңлап бөтөрмәһәк тә, кеше тауышы үҙе лә дауалау көсөнә эйә. Тауышҡа һәр күҙәнәккә, кеше тәненең һәр ағзаһына тәьсир итеү көсө бирелгән. Көйҙөң дауалау үҙенсәлеген ҡулланыр өсөн ягымлы көй тыңларға һәм Ҡөрьән уҡырға кәрәк. Түбәндә килтерелгән Ҡөрьән аяттары ошоно күрһәтә лә инде: "Һуңынан уны (Әҙәмде) камиллаштырып, кеше рәүешенә килтерҙе, уға үҙ рухынан йән өрҙө. Һәм һеҙҙең өсөн ҡолаҡтар, күҙҙәр, йөрәк яралтты. Ни сәбәпле һеҙ шул ҡәҙәре аҙ шөкөр итәһегеҙ?" (Сәждә, 9). "Бер нәмә лә белмәгән, аңламаған хәлдә һеҙҙе әсәйегеҙ ҡарынынан сығарҙы; бәлки шөкөр итерһегеҙ тип, һеҙгә ҡолаҡтар, күҙҙәр һәм күңел һиҙеме бирҙе" (Нәхл, 16:78).

Торонто университеты медицина факультеты профессоры доктор Кейт Мур үҙенең "Кеше эмбриологияһы" исемле китабында, кеше эмбрионы иң беренсе ишетеү һәләтен, һуңынан күреү һәләтен үҙләштерә, ә һуңынан уның тойоу, аңлау һәм интеллекты үҫешә, тип яҙа. Яралғының был эҙмә-эҙлелеге үрҙә килтерелгән Ҡөрьән аяттары менән тура килә. Ҡөрьәндең дауалау үҙенсәлегенә эйә икәнлеген Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә иҫбат иткән.

Аллаһ кешегә ҡолаҡтар һәм ишетеү һәләте биргән. Был, кеше матур, тыныс, ягымлы көй тыңлап, рухын һәм әхлағын ныҒытһын, йөрәген тынысландырып, аңын үҫтерһен өсөн бирелгән ниғмәттәр.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# СИРҘӘРЕҢДЕ АҒАСҠА ҺӨЙЛӘ...

## улар аңлай, хәлеңә инә



**Урманда йәки паркта йәйәү йөрөү, шифалы фитонцид һулау организмға ял бирә, нервыларҙы тынысландыра, кәйефте күтәрә. Был ғына түгел, ағастың олонона тотоноу йәки уға һөйәлеп тороу дауалай икәнен барығыҙ ҙа беләме? Ағас ҡояштан, һауанан һәм ерҙән энергия ала, уларҙың һәр береће ағасҡа үҙенсәлекле сифаттар бирә. Һәр ағастың кешегә тәьсир итә алған биополеһы бар. Һеҙ ҙә биоэнергетик яҡтан үҙегеҙгә яҡын булған ағасты табып, уның янында көсөгөҙҙө арттыра, сирҙәрҙән арына алаһығыҙ.**

### Донорҙар һәм вампирҙар

Кешегә бар ағастар ҙа бер үк тәьсир итмәй. Уларҙың ҡайһы берҙәре үҙендә энергия туплай һәм уны кешегә бирә. Был ағастарҙы шуға ла "донор" тип йөрөтәләр, имән, ҡайын, акация, саған, миләш, алмағас, йүкә, дардар (ҡорос ағасы), ҡарағай "донор" ағастар иҫәбенә инә. Улар стресс ваҡытында, хәл бөткәндә, эшкә һәләтлек кәмегәндә, иммунитет түбәнәйгәндә ярҙам итә. Ағас ҡан баҫымын да нормаға килтерә.

Кешегә таҙа энергия менән туҡланыу ғына түгел, ә ваҡыты менән насарын да сығарып тороу кәрәк, сөнки негатив энергия организмда тупланып, төрлө сирҙәр тыуҙырыуы ихтимал. Бында ла һеҙгә ағастар ярҙамға киләсәк. Усаҡ, тирәк, шыршы, ҡыҙыл йәки ҡоба тал, тал, муйыл һәм еректе энергияны һурғаны өсөн "вампир" ағастар тип йөрөтәләр. Улар баш ауыртыуын бөтөрә, күп хроник сирҙәр ваҡытында хәлде яҡшырта. Ҡайһы бер осраҡтарҙа ауыртҡан ер менән был ағастарға һөйәлеү ҙә етә.

Ҡайһы саҡта бер үк ағас берәүгә "донор", икенсегә "вампир" булараҡ тәьсир итә. Ағас һеҙҙең энергияны аламы, әллә, киреһенсә, энергия бирәме икәнен түбәндәгесә билдәләп була: 2-5 мм кинлектәге, 10-12 мм оҙонлоҡтағы фольганы ике бармаҡ менән тотоп, яй ғына ағасҡа яҡынлашығыҙ. Әгәр ҙә фольганың осо ағасҡа тартылһа, ағас һеҙҙең энергияны ала, киреһенсә булһа, энергияһын бирә.

### Төп ҡағиҙәләр

Дауаланыу өсөн башҡаларҙан айырым ултырған һау ағасты һайлағыҙ. Арыуҙы бөтөрөү, сирҙән ҡотолоу өсөн ағастың көньяғына сығырға кәрәк. Тәүҙә ағасҡа маңлайығыҙ менән тейегеҙ, һуңынан баш бейеклегендә уны ҡулдарығыҙ менән ҡосаҡлағыҙ һәм бар көүҙә менән уға һыйынып, ярҙам һорағыҙ.

Хәлегеҙ булмаһа, организмда шешеү процесы барған саҡта ағастың төньяғына сығып, ҡулдарҙы аҫҡа төшөрөп, устар менән олонға тотоноп, уға арҡа менән һөйәләргә кәрәк.

Әгәр ҙә энергия алырға ғына теләһәгеҙ, ағасҡа яҡын килеп, уны ҡосаҡлағыҙ. Ағас олонон аҫтан өҫкә ҡарай һыйпап, ағастан көс һәм һауыҡ биреүен һорағыҙ.

Ағас янында 3-5 минуттан артыҡ торорға ярамай.

Энергия ташып барғанда йәки берәй ағза сирле саҡта энергияны алыусы ағас янына барығыҙ, уны ҡосаҡлағыҙ һәм уйҙан ғына тәнегеҙҙән насар энергия һәм сирҙәр китеүен күҙ алдына килтерегеҙ. Ағас һеҙҙән энергия һура башлағас та еңелсә генә хәлһеҙлек һәм баш әйләнеүен тойорһоғоҙ. Бындай ағастар эргәһендә 15 минуттан артыҡ тороу зарарлы. "Вампир" ағас янында булғандан һуң, "донор" ағас янына барып, энергия алыу мотлаҡ.

Ағас янына дауаланыу өсөн иртәнге мәлдә йәки көндөҙгө 4-тән алып 6-ға тиклем барыу яҡшы.

Ағас менән "һөйләшеп" бөткәндән һуң, уға рәхмәт әйтергә онотмағыҙ.

### Ағастарҙың энергетикаһы

**Акация** энергия бирә, кешенең кәйефен күтәрә. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарға файҙалы.

**Ҡайын** энергия бирә, арыуҙы, стресс көсөргәнешен бөтөрә, ҡан тамырҙарының һығылмалығын арттыра, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән дауалай.

**Имән** энергия бирә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен дауаларға ярҙам итә, хроник сирҙәр ваҡытында иммун системаһын әүҙемләштерә, полиартриттан дауалай, мейе эшмәкәрлеген яҡшырта.

**Шыршы** артыҡ негатив энергиянан һаҡлай, хәлһеҙлекте бөтөрә, ҡурҡыу, депрессия, тынысһыҙлыҡты булдырмай.

**Тал** энергияны ала, тынысландыра. Тик кире энергия бәтһә, тал һыңғайын һура башлай. Был ағас баш ауырыуын бөтөрә.

**Балан** энергияны ала, дауалаусылар араһында магик ағас булараҡ ҡулланыла. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарға килешә. Уға саҡ ҡына ҡағылып алыу ҙа күңелгә тыныслыҡ бирә.

**Саған** энергия бирә, күңелде күтәрә.

**Йүкә** көслө энергияға эйә, депрессиянан ҡотолдора. Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре ваҡытында ярҙам итә.

**Ерек** энергияны ала, нервылар көсөргәнешен бөтөрә, ауыртыуҙы баҫа. Тик ерек янында оҙаҡ тороу баш ауыртыуына, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлеге боҙолоуына килтерә.

**Усаҡ** - ағастар араһындағы иң көслө "вампир". Энергияны ала, артыҡ көсөргәнештән ҡотолдора, ауыртҡан урын менән һөйәлһәң, - ауыртыуҙы бөтөрә. Ниндәйҙер күңелһеҙ хәлдәр килеп сыҡһа, был ағас янына барып, йыйылып киткән проблемаларығыҙҙан арына алаһығыҙ. Тик уның янында оҙаҡ булырға кәңәш ителмәй, йөрәге ауыртҡан кешеләргә лә усаҡтың кире тәьсир итеүе ихтимал.

**Ҡарағай** энергия бирә, пессимизмдан ҡотолорға ярҙам итә. Тормошоғоҙҙа ниндәйҙер мөһим ваҡиға алдынан ҡарағайға барып, уның менән "һөйләшеп", "кәңәшләшеп" ҡайтыу яҡшы буласаҡ.

**Тирәк** кешенең кире энергияһын ала, төрлө психологик проблемалар ваҡытында ярҙам итә. Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфаланыусыларға тирәк янына барыу кәңәш ителмәй.

**Шулай итеп...**

**Ағастарҙың файҙалы көсө тураһында беҙҙең ата-бабалар ҙа белгән һәм улар янына дауаланырға йөрөгән. Борон һәр кешенең яуыз көстәрҙән ҡурсалаусы һәм һаҡлаусы ағасы бар, тигән ышаныу булған. Ағас тере йән иҫәпләнгән, ул бар ҡайғыларҙан арындырған. Һуғышта яраланған кеше яңынан көс йыйыу өсөн имән янына барған. Ғаилә бәхете, һау бала һорап, ҡатын-ҡыҙ йүкәгә килгән. Тормошо яҡшы булһын өсөн йәш ҡыҙ ҡайынға һыйынған. Бөгөн ғалимдар ҙа шуны раҫлай: имән ир-аттың проблемаларын хәл итергә "яратһа", йүкә - ҡатындарға, ҡайын йәш ҡыҙҙарға ныҡыраҡ ярҙам итә.**

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 2-се һабаҡ: "Иң ауыры - тәүге көн"

... Көнмө был, төнмө? Тәҙрәнән урамға ҡараһам, көн һымаҡ, диҡҡәтемде бүлмә эсенә күсерһәм, күҙ алдыма төн баҫа. "Туҡта, был минме әле ул?" тип, көҙгөгә ҡараш ташлайым. Унан миңә тексәйеп ҡарап торған бәндәне танымайым да һымаҡ. Кем һуң ул? Ҡайҙалыр осратҡан да, күргән дә кеүекмен. Күҙҙәремде йомоп, кире асам. Бер аҙ сырамыттым, үҙемә оҡшаған икән дәһә...

Тик тороуым тағы ла йөрәккә көс төшөрҙө, фатирымдың һәр бүлмәһенә сығып, һәр таҡтаһына баҫып, бик оҙаҡ йөрөнөм. Саҡ-саҡ ҡына хәл ингәндәй булды. Үҙ хәлемә ситтән ҡарап эш итергә кәрәк икәнлеген иҫемә төшөрҙөм. Был һабаҡты бер ағай өйрәткәйне. Ул шунан ғибәрәт: иң ҡыйын саҡта үҙлегеңде ситкәрәк ҡуйып, үҙ-үҙеңә икенсе кеше күҙлегенән ҡарау. Оҙаҡ көттөрмәне, сәсрәтә әйтте миңә ҡарап торған кеше: "Әхмәр, нишләүең был, һиңә бит аяҡ һуҙырға ла оҙаҡ ҡалмаған. Үлеп-нитеп китһәң, туғандарың башҡалар алдында оятҡа ҡаласаҡ бит. Көллө мир һөйләп, аяҡ күтәреп көләсәк. Балаларың ғүмер буйы: "Беҙҙең атай эсеп үлгән", - тигән мәсхәрә утында янасаҡ. Был бүлмәлә ҡалма, тиҙерәк, тиҙерәк ысҡын бынан..."

Ҡаланан алыҫ түгел ауылда йәшәүсе бер туған апайымды иҫкә төшөрҙөм. Эйе, һис юғы уның менән хушлашып өлгөрәйем. Көс-хәл менән кейенеп, шаулап торған ҡала урамына сыҡтым. Йорттар ауып барған һымаҡ, машиналар баш-түбән йөрөгәндәй. Сайҡалып, ҡолай яҙҙым. Трамвайға ултырҙым, тик инеүем булды, йөрәк йәнә туҡтай яҙҙы. Бер туҡталыш барғас, төшкәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Кеше һирәгерәк йөрөгән урамдар, тыҡрыҡтар буйлап, автовокзал яғына һәлпәнләйем. Тейешле маршрутҡа билет алып, автобус көтәм. Кешенең күплеге. Ниңәлер барыһы ла шат йылмая, сәбәп юҡтан, һылтау табып, хахылдаша. Әллә минән көләләрме? Берәһе килеп, бер ауыр һүҙ әйтһә, ҡысҡырып илап ебәрерҙәймен. Бөтә кешеләр алдында ниндәйҙер ғәфү итмәҫлек гонаһ ҡылған кеүекмен.

Оҙаҡ көттөрмәне, килде кеше ташыусы арба. Йөҙ кеше һыйҙырышлы автобусҡа ике йөҙләп кеше һыя икән, әммә был минең файҙаға түгел. Тын алғыһыҙ. Йөрәк өлпөлдәргә тотондо, ул туҡтамаһын өсөн берҙән-бер сарам - хәрәкәт. Бер-береһенә тығыҙ һылышҡан кешеләр араһында ҡыҫылып торған килеш, ҡыймылдарға, йәшәргә тырышам. Мең бәлә, йөҙ ыҙа менән, пассажирҙарҙан әрләнә-әрләнә, саҡ үлмәй, ауылға барып еттем.

Мине күргән апайым илап ебәрҙе, йүгереп йөрөп сәй ҡуйҙы, тәғәм хәстәрләне. Уларҙы ауыҙға ҡабыу түгел, күтәрелеп тә ҡарай алмайым. Апайым менән хушлашып уҡ бөттөм, тағы ла икәүләшеп илашып алдыҡ. Кискеһен дә, ни ашай, ни сәй эсә алмай, апайым һалып биргән урынға ятырға уйланым. Барлығы биш секундтай ғына ойоғанмындыр, үҙемә таныш булған кисереш аша тағы ла упҡынға тәгәрәйем.

Хәҙер инде мин өс көн, өс төн керпек тә ҡаҡмағанмын. Өйҙәгеләргә ҡамасауламаҫ өсөн, тышҡа сыҡтым. Ихата уртаһында тауҙай бесән өйөлөп ята. Еҙнәм уны көндөҙ "Беларусь" менән алып ҡайтҡан. Тел осомда "Хәрәкәт, хәрәкәт" тигән һүҙҙәрҙе ҡырҡ ҡабатлап, ихата буйлап бергилке әйләндем дә, ҡулыма һәнәк алдым. Ипләп кенә, остоҡ ҡына бесән сәнсеп, әүеҫлек башына ташланым, тағы ла сәнсем, тағы...

Унынсы ҡат өҫкә бесән елгәргәндә, маңлайымдан ағып төшкән бер тамсы тир ғәләмәтен тойҙом. Тәнем буйлап һыуыҡ һауа ағымы йүгереп үтте. Был юлы инде һәнәгемә күберәк бесән эләктерҙем. Тағы ла биш тапҡыр ынтылғас, арҡам лыҡма һыу булды. Бер аҙҙан шыбыр тиргә баттым, ҡапыл хәлем бөттө. Соланға инеп, биҙрәлә ултырған һыуға йомолорға иттем. Эскән генә шыйыҡса кире ауыҙҙан китте.

Минең хәлемде уйлап, йәнен ус эсендә тотҡан апайым өйҙән килеп сыҡты. Ул бер ҡулымдағы сүмескә, икенсе ҡулымдағы һәнәккә ҡарап, хәлемде үҙенсә баһалап, кире өйгә йомолдо. Мин тағы ла бер нисә һәнәк бесән ташлағансы, иҙелгән ҡорот һурпаһы сығарҙы. Үҙемде ошондай саҡтарҙа мең тапҡыр ҡотҡарған ҡеүәтле шыйыҡсаны бер тынала эстем. Әммә эсемдәге теге "үлгән бесәй" ҡорот әселеген үҙһенмәнеме, ауыҙымдан кире сығарҙы. Шулай ҙа маңлайҙан туҡтауһыҙ тир аға башланы.

Бер аҙҙан апайым ҡайнар сәй яһап алып сыҡты. Эҫе шыйыҡса нисектер эскә төшөп ятты кеүек, әммә оҙаҡҡа түгел, тағы ла кирегә китте. Ахырыһы теге "үлгән бесәй" танһыҡ ризығын таптырып ҡырталаша, икенсе төрлө шыйыҡса ҡойһаң, әллә үсегеп инде, баш тарта.

"Бесәй" менән таң атҡансы көрәштек: мин бер йөк бесәнде әүеҫлек башына ташлап бөтөрҙөм, апайым иһә өйҙән миңә бер туҡтауһыҙ шыйыҡса ташыны.

Эсеү ташлағанда иң ауыры тәүге көн. Эсеңдә ятҡан теге хәшәрәтте тонсоҡторҙом тип тә уйламайһың, сөнки уның ҡаны оҙайлы йылдар буйы минең дә ҡаныма күскән. Наркологтар әйтеүенсә, ҡанды тулыһынса таҙартыр өсөн кеше кәмендә 13 йыл эсмәҫкә тейеш. Тәүбә төнөмдәге иң ҙур еңеүем шунан ғибәрәт: мин тәүге тапҡыр баш төҙәтмәнем.

Бесәнен төн оҙононда әүеҫлек башына мендергәнем өсөн эй ҡыуанды еҙнәм. Иртәнсәк: "Әйҙә, ҡәйнеш, һыныҡ яҙҙыр" тип, ҡойоп та биреп ҡараны. Мин тәүге тапҡыр рюмкаға үрелмәнем.

Иң ауыры тәүге көн, тиҙәр. Артабанғы көндәрҙә лә еңел булманы.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЯРҘАМ КӨТМӘ,

## әммә үҙең ярҙам итеүҙән туҡтама

Байрамдар ваҡытында ауылға ҡайтып ял итеп, кире Өфөгә килдем. Ҡаршы алыр кешем юҡ, автобустан төшкәс, ауыр сумкамды бер үҙемә һөйрәргә тура килде. Ярай әле, йәшәгән ятағыма тиклем маршрут автобустары йөрөп тора. Тик бер кирегә китһә, китә икән ул: шоферҙың ашығыуы сәбәпле, кәрәкле туҡталышҡа тиклемге бер боролошта уҡ төшөп ҡалырға мәжбүр булдым. Урамда миңә бер кем дә ярҙам итергә ашыҡманы, үтенесемде әйтеүемә ҡаршы көлөп кенә үттеләр. Йөгөмдән дә ауырыраҡ уйҙарға бирелеп, өсөнсө ҡаттағы бүлмәмә инеп ауғансы ике сәғәт самаһы ваҡыт уҙғайны.

Башымды береһенән-береһе әрнеүлерәк уйҙар телгеләне. Замана кешеләре кешелеклелек кеүек сифаттарын әллә бөтөнләй юғалтҡан инде? Техника үҫешкән һайын, кешеләрҙең йөрәктәре лә тимергә әүерелә түгелме һуң? Әллә заман башҡа - заң башҡа тигән һүҙҙәр өҫкә сығамы? Тик нимә генә булмаһын, мин ошо ваҡиғанан һуң үҙ йөгөндө үҙең күтәрергә кәрәк икәненә инандым. Бөгөнгө көндә һин йә тормош ауырлыҡтарына ҡаршы торорҙай көс табып, алға бараһың, йә йөгөң аҫтында иҙелеп, аҫҡа, упҡынға осаһың. Ул ваҡытта инде һиңә ярҙам итеүселәр булмаясаҡ, яҡты ҡояш аҫтындағы үҙ урыныңды бүтән берәүгә бүләк итәсәкһең...

Үҙеңде үҙең хәстәрләп , маҡсатыңа табан ныҡышмалы аҙымдар менән атлап, тулы ҡанлы итеп йәшәргә ынтылырға кәрәктер ул. Әммә тирә-йүндәгеләрҙең һиңә ярҙамы булмаған өсөн генә уларға ҡарата иғтибарһыҙ булыу ярамай. Ҡылған изгелектәрең ҡасан да булһа кире әйләнеп ҡайтыуына ышанырға кәрәктер.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Яҡындарыңды үҙеңде яратҡан кеүек ярат

**Үҙҙәренә түбәнһетеп ҡарап, әрнеүле кәмселек тойғоһо кисереп йәшәгән кешеләр була. Үҙеңде бүтәндәргә ҡарағанда лайыҡһыҙыраҡ, йәмһеҙерәк, улай уҡ аҡыллы һәм яҡшы түгел, тип һанау һине ярата алырҙай кешеләрҙән дә айырып тора.**

Үҙеңдең шәхесеңә ҡарата оялыу һәм йәлләү тойғоһо һинең энергияңды йолоп алып, тормошоңдо емереүе ихтимал. Үҙеңдә ышаныс тоймаған ваҡытта барлыҡҡа килгән күңел бушлығы һиндә тамыр йәйгән ҡарашты көсәйтә генә. Был ошолай барлыҡҡа килә: һин үҙеңә: "Әгәр мин бүтәндәрҙе үҙемә яҡын килтерһәм, улар минең булмышымды күрәсәк һәм минең дуҫтарым ҡалмаясаҡ. Шуға күрә лә мин кешеләрҙе яҡын килтермәйем, был мин ҡурҡҡан һөҙөмтәләргә килтерәсәк. Минең дуҫтарым юҡ", - тип әйтәһең.

Кеше аңы ысынбарлыҡты йыш ҡына ябай формаларға бүлә: аҡ йәки ҡара; яҡшы йәки насар; мин йәки һеҙ, һәм быңдай "йәки-йәки" тигән фекерләү образы яңылыш уйҙарға этәрә һәм кеше бүтәндәргә лә, үҙеңә лә бер төрлө иғтибар һәм хәстәрлек күрһәтеп булмай, тигән фекергә ышана башлай. Бүтән кешеләргә ҡарата ихтирамлы һәм хәстәрлекле мөнәсәбәт баһаланған беҙҙең мәҙәниәт традицияларында тәрбиәләнгән күптәр үҙ тойғоларыңа һәм ихтыяждарыңа иғтибарлы булыу - ул эгоизм, тип иҫәпләй. Моғайын, һине лә "яҡындарыңды үҙеңде яратҡан кеүек яратырға тейешһең", тип өйрәткәндәрҙер, ысында иһә, бүтәндәрҙе яратыуҙың берҙән-бер ысулы - ул үҙеңде лә шулай уҡ ярата белеү ул.

Әгәр һиндә үҙеңде түбәнһетеү ғәҙәте барлыҡҡа килгән икән, башҡаларға ла һине үҙенә тиң итеп ҡабул итеүе ауыр була. Ысын мөхәббәт, ғәҙәттә, тышҡы ҡиәфәттәге, һәләттәге, ҡараштарҙағы йәки башҡа тышҡы сағылыштарҙағы айырмалыҡтарға ҡарамаҫтан, бер-береһенә тиң булыуын аңлаған кешеләр араһында ғына үҫешә ала. Әгәр һин донъялағы һәр кем кеүек, үҙеңде кәрәкле, һөйөүгә лайыҡ булған кеше, тип һанайһың икән, һине яратырға һәм һиңә ярҙам итергә теләгән дуҫтар тап.

Шәхси дәрәжәңә ҡарата сәләмәт мөнәсәбәттә булыу үҙ-үҙеңде яратҡан Нәркәс булыу тигәнде аңлатмай. Нәркәс - грек мифологияһындағы һыуҙағы үҙенең сағылышына һоҡланып көн үткәргән һәм бүтәндәргә иғтибар бирмәгән үҫмер. Бөгөн идеаль прическа эшләргә тырышып, ваҡыт уҙғарған йәки йөҙөндәге бер етешһеҙлек тә күренмәҫлек итеп макияж һалған кешеләрҙе шулай атайҙар. Былар барыһы ла бүтәндәр уны матур һанаһын өсөн эшләнә. Ундайҙар нисек бар, шул килеш ҡалғанда бик үк матур күренмәҫмен, тип хәүефләнә, шуға ла ул башҡаларға оҡшар өсөн үҙен үҙгәртергә, яҡшыртырға тырыша. Үҙеңә ҡарата ысын ихтирам тойғоһо былай билдәләнмәй. Әгәр кеше көҙгөгә ҡарай икән, ул быны үҙен тәнҡитләр йәки үҙе менән һоҡланыр өсөн түгел, ә йөҙөндә сағылған төп асылына күҙ һалыр өсөн эшләй. Ҡурҡыу һәм уңайһыҙлыҡтарға иғтибар бирмәйенсә, үҙ күҙҙәренә һөйөү менән тәрәнерәк бағырға тырышҡан кеше был мөхәббәтте бүтәндәр менән ысын күңелдән бүлешә ала.

Беҙ бер-беребеҙгә аңлап етә алмаҫлыҡ мөхәббәт ептәре менән бәйләнгәнбеҙ. Был һинең һәм яҡыныңдың телеңдә әйткән көс һәм һеҙ икегеҙ ҙә күңелегеҙҙә йәшәгән мөхәббәткә эйә буласаҡһығыҙ. Киләһе юлы, тағы ла дуҫтар табырға теләйһең икән, тәүҙә күҙҙәреңә баҡ һәм унда үҙеңә ҡарата яҡшы тойғо күрергә тырыш.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

ЮЛДАР, ЮЛДАР...

# СӘЙӘХӘТЕБЕҘҘӘН УҢДЫҠ -

## Теләстә, Баймаҡта, Сибайҙа, Арҡайымда...

**Беҙ, Өфөнөң атаҡлы ҡурайсы, педагог Әҙһәм Исҡужин исемендәге 9-сы музыка мәктәбе коллективы күптән түгел ҡурайсының тыуған яғында - Баймаҡ тарафында сәфәрҙә йөрөп ҡайттыҡ. Күптәребеҙ Уралтау төбәгенә тәүге тапҡыр барҙы, ундағы тәбиғәттең хозурлығына, кешеләрҙең ихласлығына хайран ҡалып йөрөнөк.**

Башта самалауыбыҙ буйынса оҙон ғына тойолған юл һиҙелмәне лә. "Газель" тәҙрәһенән беҙгә асылған Уралтау тәбиғәте һоҡланып туйғыһыҙ ине. Йәнде арбарлыҡ ғорур һәм мөһабәт тауҙар, ҡарағайҙары һәм шыршылары күккә ҡаҙалған ҡуйы урмандар, бихисап төҫтәге гөл-сәскәгә күмелгән болондар һәм аҡландар, аҙым һайын тиерлек осраған моңло шишмәләр, йылғалар, урамдарына әйҙүкләп тороусы ауылдар беҙҙе оҙата барҙы.

Башҡортостандың тәүге баш ҡалаһы - Әҙһәм Исҡужиндың тыуған ауылы Теләстә беҙҙе ҡурайсының туғандары Әхтәм Исҡужин менән Мәүлит Арыҫланов ҡаршыланы. Улар беҙҙе Әҙһәм Исҡужиндың ата йортона алып китте. Унда беҙҙе йорт янында милли ризыҡтарҙан һығылып торған табын өҫтәле ҡаршыланы. Нимә генә юҡ унда? Өҫтәл түрендә самауыр тора, янығына милли ашамлыҡтар теҙелгән, бишбармағы ла, төрлө ҡамыр аштары ла, эремсеге лә, сәк-сәге лә, ҡоймағы ла, ҡорото ла, ҡымыҙы ла бар. Ҡурай, баян тауыштары байрам кәйефенә мәртәбә өҫтәй. Ҡунаҡсыл хужалар беҙҙе өҫтәл артына саҡырҙы. Башҡорт аш-һыуы, һәр саҡтағыса, телеңде йоторлоҡ. Ашап алғас, Әхтәм Исҡужин беҙҙе ҡурайсының шәжәрәһе менән таныштырҙы, директорыбыҙ Әхиәт Ғәйетбаев уға яуап һүҙе итеп сәфәребеҙҙең маҡсаты, ҡурайсының исемен йөрөткән мәктәптең уңыштары хаҡында бәйән итте. Һуңынан Әҙһәм Исҡужиндың һуңғы төйәгенә - ҡәберенә барып сәскәләр һалдыҡ, бер минутҡа тын ҡалдыҡ.

Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе йортонда урынлашҡан Теләс ауылының тарихи музейына барыу, ундағы экспонаттар, тарихи документтар менән танышыу хәтеребеҙгә ныҡ уйылып ҡалды.

Баймаҡ районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Радмир Иҫәнбаев, Теләс ауыл хакимиәте башлығы Рәсүл Арыҫланов тырышлығы менән беҙҙең Теләскә килеүгә тап килтереп, Әбүбәкер хәҙрәт Хөсәйеновтың хөрмәтенә ғилми конференция ла уҙғарылды.

Был яҡтарҙың төндәре лә сихри һәм серле икән. Райондың Фәнил Ғөбәйҙуллин, Камил Вәлитов кеүек арҙаҡлы шәхестәре йәмле Ирәндек тауҙары буйындағы Граф күле буйында беҙҙең өсөн күңелле ял ойошторҙо.

Иртәгеһен беҙҙе район үҙәгендә - Баймаҡ район китапханаһында көтәләр ине инде. Унда беҙ китапхана хеҙмәткәрҙәре, тыуған яҡты өйрәнеүсе энтузиастар менән осраштыҡ. Шундай шәхестәрҙең береһе - Әмир Сәйғәфәров беҙгә райондың тарихы, унын данлыҡлы кешеләре хаҡында һөйләне. Ә инде китапхана директоры Луиза Дәүләтшина үҙенең хеҙмәткәрҙәре менән беҙҙең иғтибарға Баймаҡ районы хаҡында китаптар, экспонаттар, ҡул эштәре тәҡдим итеп, тарихи экскурс ойошторҙо. Китапханасылар иҫ киткес ашнаҡсы ла икән. Ҡыҙҙарҙың үҙ ҡулы менән әҙерләнгән башҡорт милли ризыҡтарынан торған табын зауыҡлы ла, татлы ла булды.

Баймаҡ ҡалаһының иҫтәлекле урындары менән танышҡандан һуң, беҙ Урал аръяғының баш ҡалаһы - Сибайға, артабан Арҡайым ҡурсаулығына юл тоттоҡ. Бар донъяға танылған боронғо был ҡаласыҡ урыны, ундағы музей менән танышыу, ул ерҙең энергетикаһына ҡойоноу беҙҙең сәфәрҙе тағы ла зауыҡлыраҡ итте.

**Шулай итеп...**

**Ике генә көнгә һуҙылған ошо сәйәхәттән беҙ ғүмеребеҙгә етерлек көс, илһам, ҡөҙрәт алдыҡ. Иң мөһиме, беҙ атаҡлы ҡурайсының тыуған яғында үҙебеҙҙе бәхетле тойҙоҡ. Әҙһәм Исҡужин кеүек шәхестәрҙе тыуҙырған төбәк, халыҡ тик шулай ғына булырға тейеш тә...**

**Татьяна ЖЕЛТОВА.**

**Ә. Исҡужин исемендәге 9-сы музыка мәктәбенең директор урынбаҫары.**

ТУҠТА, МӘЛ!



Флүр ҒАЗИН фотоһы.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ВӘҒӘҘӘ ЕҢЕЛ БИРЕЛДЕМЕ?

## Тимәк, ул үтәлмәйәсәк

Бәхет - ул ысынбарлыҡ түгел, ә хәтирәләр: беҙгә һәр ваҡыт йәшәлгән йылдар бәхетлерәк тойола.

**(Василий Ключевский).**

Хәтер - беҙҙе бер нисек тә ҡыуып сығарып булмаған ожмах ул.

**(Жан Поль).**

Әхлаҡи тәрбиә бәхетле булырға өйрәтмәй, ә нисек итеп бәхеткә лайыҡлы булырға өйрәтә.

**(Иммануил Кант).**

Барыһы ла азат булмай тороп, берәү генә ныҡлап азат була алмай. Барыһы ла әхлаҡлы булмай тороп, берәү генә тулыһынса әхлаҡлы була алмай. Барыһы ла бәхетле булмай тороп, берәү генә ысынлап бәхетле була алмай.

**(Герберт Спенсер).**

Әхлаҡ тураһында һөйләү еңел ул, уны нигеҙләү ауыр.

**(Артур Шопенгауэр).**

Кешеләр менән эш иткәндә мин һәр ваҡыт һүҙемдә торам. Хоҙай менән эш иткәндә һүҙемдә бик үк тормайым, сөнки Ул барыһын да ғәфү итә.

**(Пол ван Дорен).**

Мөмкин булмаған эштәрҙе генә вәғәҙә ит, шул саҡта һине бер низә лә ғәйепләй алмаҫтар.

**(Жак Деваль).**

Вәғәҙәне үтәмәүҙең беренсе билдәһе - вәғәҙәнең еңел бирелеүе.

**(Эдгар Хау).**

Һин һуғып та, һиңә яуап бирмәгән кешенән һаҡлан: ул һине бер ваҡытта ла ғәфү итмәҫ һәм үҙе лә ғәфү үтенмәҫ.

**(Бернард Шоу).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: " Бер хаким намаҙ уҡып, доға ҡылып ултырған дин әһеле янынан үҙып бара, ти. "Доғаларыңдың йөкмәткеһе нисек?" - тип һорай дин әһеленән хаким. "Яуызлыҡ ҡылма, изгелек ҡыл. Йөрәгеңде таҙа килеш һаҡла, тигән телак телайем", - тигән дин әһеле. "Һуң ул теләктәрҙе өс йәшлек сабыйҙар ҙа белә һәм Хоҙайҙан һорай ала. Һинең теләктәрең ҡатмарлыраҡтыр, тип уйлағайным" , - ти хаким. "Бәлки был теләктәрҙе өс йәшлек бала ла ҡабатлай алалыр, әммә уларҙы һикһән йәшлек ҡартҡа ла ғәмәлдә атҡарыу ауыр", - тип яуап биргән дин әһеле".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5481
Заказ 2913